ISSN 0207 – 8740

# БАШҠОРТОСТАН ҠЫҘЫ

Март 2023

СИБАЙ МӘҘӘНИӘТЕН ДӨРЛӘТЕҮСЕЛӘР

ХУШ КИЛӘҺЕҢ, РАМАҘАН!

ӘБҮБӘКЕР УҢҒАНДАРЫ



12+

podpiska-pochta.ru



Гөлназ ҠОТОЕВА

# Гүзәл затҡа

Һеҙ үҙегеҙ – яҙ ҙа, наҙ ҙа, ҡуҙ ҙа,
Бишек бәүетеүсе тилбер ҡул да!
Ғүмер биргән, күпер үргән кеше,
Тоғро юлдаш тормош тигән юлда.

Ни мөғжизә икән был ҡатын-ҡыҙ!
Юҡтан бар яһаған илаһи зат!
Ожмах – һеҙҙең аяҡ аҫтығыҙҙа,
Һеҙ бәхетле икән – донъя ла шат.

Ни мөғжизә икән был гүзәл зат!
Ҡарашығыҙ алып килә яҙҙар!
Һеҙҙең менән генә донъя күркәм,
Һеҙҙең менән бирелә Ергә наҙҙар.



podpiska.pochta.ru



# Әсәй мөхәббәте

Бала саҡта күршеләргә барып яҙ тураһында тәүгә шиғыр яҙып алып ҡайтҡайным. Әсәйемә бирҙем. Шул хәтлем ҡыуанды һәм мәктәптә Зөһрә апай Кашаповаға, ҡыҙым шиғыр яҙа башланы, тип барып әйткән. Яҙғаным ҡайнар хистәрҙе сағылдырһа ла, шиғыр булмағандыр инде. Пионер бүлмәһенә саҡыртып, шиғырҙың рифмаһы, ритмы булыуы тураһында һөйләне уҡытыусы апай. «Яҙ ҙа яҙғандарыңды «Башҡортостан пионеры», «Пионер» (хәҙерге — «Йәншишмә», «Аманат») кеүек баҫмаларға ебәрербеҙ», — тине. Шулай итеп, мин тырышып шиғырҙар, мәҡәләләр яҙа башланым. Өйгә редакциянан хат килһә, иң тәүҙә әсәйем менән атайым шатлана ине. Бейемәйенсә конвертты тоттормайҙар. Мин илап торам, көлөп торам, бейей-бейей алам конвертты. Илайым — сөнки был һынау оҡшамай, көләм — сөнки шатлығымдан башым күккә тейә. Һәр хат оҫталығыма, үҫешемә күпер тип ҡабул ителә ине. Мәҡәләмде баҫманылар, тип ҡайғырманым. Улар һораған темаларға, етешһеҙлектәремдән арынып, яҙып ебәрергә тырыштым. Бер ваҡыт район гәзите «Осҡон»да баҫылған мәҡәләм өсөн бирелгән гонорарыма әсәйемә мәрйен төҫлө ерлеккә аҡ борсаҡтар төшкән дүрт сынаяҡ алып ҡайтып бирҙем. Әй ҡыуанды ҡәҙерлем. Тәүге эш хаҡыма үҙемә нимәләр алырға уйламай, тап уны ҡыуандырырға тырышыуым өсөн хәҙер һөйөнәм. Әсәй — кеше өсөн иң изге йән. Уның һәр һүҙен дөрөҫ тип ҡабул итәһең. Уны бер кәмселекһеҙ, матур итеп күрәһең. Хәҙер, йылдар үткәс, күптән гүр эйәһе булған әсәйемде ҡәҙер итә алмауыма йәнем әсей. Әммә ул аңлап ҡабул иткәндер, миңә үпкәләмәйҙер, тип уйлайым. Сөнки әсәйҙәрҙә генә балаһын төрлө яҡлап ғәфү итеүсе, ҡурсалаусы, миһырбанлы йөрәк бар.

Бер балаһы өсөн мең тулғаҡ тота, мең ғазап үтә.

— Әсәй, табиптар һиңә мин тыуғандан һуң ҡабат бала табырға рөхсәт итмәгән, ниңә үҙеңдең ғүмереңде ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, ҡустымды, һеңлемде таптың? — тип һорай ҡуйҙым.

— Һин яңғыҙ ҡалмаһын тип...

Ябай ғына һөйләшеүҙә күпме мөхәббәт, күпме наҙ, күпме яратыу. Әсәйем бер ҡасан да «ҡыҙым», «алтыным» тимәне. Ул миңә мөхәббәтен тотош ғүмере менән иҫбатланы. Ул мөхәббәт бөтә тормошом буйы оҙата килер.

**Гөлназ ҠОТОЕВА.**



podpiska.pochta.ru

№3 Март 2023

# ЙӨКМӘТКЕ


**Баш мөхәррир һүҙе**

1 Әсәй мөхәббәте

**Беҙҙең тышлыҡта**

3 Кәртәләр юҡ уңғандарға

**Аллаһ бәрәкәте**

7 Изге Рамаҙан

**Ауыл һулышы**

8 Уңыш башланғысы – мөхәббәт

**Юлдар саҡыра**

10 Сибайҙарҙың моң сулпыһы

**Тәбиғәткә сәйәхәт**

14 Киң офоҡтар серен аса ул

**Милли йолаларыбыҙ**

16 Юлдан яҙҙырмаҫ халыҡ әҙәбе

**Әҙәби балҡыш**

18 Таңһылыу Ҡарамышева. «Сарсағанға һыуһын була алмай Тереһыуһыҙ ҡалған буш ҡоҙоҡ...» Шиғырҙар

20 Гөлсирә Ғиззәтуллина. «Әсә йөрәге – әүлиә». Хикәйә

**Сихәт**

24 «Тамырҙарҙа ҡан уйнаһын, ойомаһын»

**Беҙгә килгән хаттарҙан**

26 Милли асылыбыҙҙы һаҡлаусылар

**Һөнәренең оҫтаһы**

28 Беҙ бергә булғанда

**Беҙҙең бәйгеләр**

30 Ҡомартҡы бишек

**Тәмлекәс**

32 Көс, дәрт бирә тыуған ер


8-се бит



30-сы бит



28-се бит






14-се бит



26-сы бит



32-се бит

**Тышлыҡта** – «Тәмле ихата» аҙыҡ-түлек магазиндары селтәре хужабикәһе Эльвира Фаил ҡыҙы Ғаймалетдинова.


«БАШҠОРТОСТАН ҠЫҘЫ»
ҠАТЫН-ҠЫҘҘАР ҺӘМ ҒАИЛӘ ӨСӨН
ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ, ӘҘӘБИ-НӘФИС ЖУРНАЛ
«ДОЧЬ БАШКОРТОСТАНА»
ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ, ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ ЖУРНАЛ
ДЛЯ ЖЕНЩИН И СЕМЬИ

**1968 йылдың ғинуарынан башлап сыға**

Ойоштороусылары:
Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы; БР «Башҡортостан Республикаһы» нәшриәт йорто ДУП-ы

Учредители:
Агентство по печати и средствам массовой информации Республики Башкортостан; ГУП РБ Издательский дом «Республика Башкортостан»

Баш мөхәррир
Гөлназ Мират ҡыҙы ҠОТОЕВА



Кәңәшселәр ҡоро:
Лилиә ҒҮМӘРОВА, Таңсулпан ҒАРИПОВА, Неля ҒӘЙНЕТДИНОВА, Луиза ДӘҮЛӘТШИНА, Гөлфиә ИҘЕЛБАЕВА, Йомабикә ИЛЬЯСОВА, Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА, Сәлиә МЫРҘАБАЕВА, Миңзәлә ФАЗЛЕТДИНОВА, Фәнүзә НӘҘЕРШИНА, Гүзәл СИТДИҠОВА, Рәшиҙә СОЛТАНОВА, Мәрйәм СОЛТАНОВА, Зәйтүнә ШӘРИПОВА, Гүзәл ШӘҺИЕВА, Гөлнур ЯҠУПОВА.



Баш мөхәррир ______ 273-26-89
Баш мөхәррир урынбаҫары
Рәсүл БАЙГИЛДИН ______ 272-63-02
Яуаплы секретарь
Альбина ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА ______ 272-18-09
Баш бухгалтер
Алина ЗӘЙҘУЛЛИНА ______ 273-40-49
Бүлектәр
Ижтимағи-сәйәси тормош, социаль мәсьәләләр, ғаилә
Альмира КИРӘЕВА ______ 272-18-09
Хаттар, ауыл хужалығы, йәштәр менән эшләү, ҡушымта
Гөлшат ҠУНАФИНА ______ 272-18-09
Әҙәбиәт, мәғариф, мәҙәниәт, сәнғәт
Айзилә МОРТАЕВА ______ 273-26-89
Биҙәлеш мөхәррире
Рауил ШӘЙХЕЛИСЛАМОВ ______ 272-18-09
Фотохәбәрсе
Булат МАЛИҠОВ ______ 272-63-02
Верстка инженеры
Гөлнар ТӨХБӘТОВА ______ 272-18-09

Редакцияның һәм нәшер итеүсенең адресы: 450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13.

Адрес редакции и издателя: 450079, Республика Башкортостан, г. Уфа, ул. 50-летия Октября, 13.

Сайт: bashkizi.ru
E-mail: bashkizi2022@mail.ru



Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм киң коммуникациялар өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт тарафынан 2017 йылдың 27 ғинуарында ПИ №ФС 77-68472-се таныҡлыҡ менән теркәлде.

Редакцияға килгән хаттарға һәм ҡульяҙмаларға баһа бирелмәй, улар кире ҡайтарылмай. Мәҡәләләрҙә килтерелгән факттар өсөн уларҙың авторҙары яуаплы. Баҫырға ҡул ҡуйылды 10.03.2023 йыл. Нәшер ителде 17.03.2023 йыл. Ҡағыҙ форматы 60x90 1/8. 4 баҫма табаҡ. Ағартылған ҡағыҙ. Шартлы баҫма табаҡ 4. Иҫәп. нәш. табаҡ 7. Офсет ысулы менән баҫылды. Тиражы 3600 дана. Заказ №2.0034.23

(р) Ошондай тамға ҡуйылған мәҡәләләр коммерция нигеҙендә баҫыла.

Башҡортостан Республикаһының «Республика Башҡортостан» Нәшриәт йорто дәүләт унитар предприятиеһы филиалы – «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды. 450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13.
Отпечатано в Республиканском издательстве «Башкортостан» – филиал ГУП РБ Издательский дом «Республика Башкортостан». 450079, Республика Башкортостан, г. Уфа, ул.50-летия Октября, 13.
Журналда полиграфия кәмселеге булған осраҡта нәшриәттең производство-техник бүлегенә мөрәжәғәт итегеҙ: 8 (347) 272-71-01.



© «Башҡортостан ҡыҙы», 03 (650), 2023.

12+



podpiska.pochta.ru

# КӘРТӘЛӘР ЮҠ УҢҒАНДАРҒА

*«Тәмле ихата» аҙыҡ-түлек магазиндар селтәре хужабикәһе Эльвира Фаил ҡыҙы Ғаймалетдинова (Нурғәлиева) — әлеге көндә ҡулланыусыларҙы сифатлы ризыҡ менән тәьмин итеү өсөн барлыҡ көсөн һалған билдәле эшҡыуарҙарҙың береһе.*

*Өфө ҡыҙы Эльвира Нурғәлиева 1976 йылдың 28 ноябрендә ғаиләлә икенсе бала булып донъяға килә. Атаһы — Илеш егете Фаил Ғаздали улы — «Башмебель» фабрикаһында директор урынбаҫары булып эшләй, сығышы менән Ҡариҙелдән булған әсәһе Әлфирә Хәлим ҡыҙы Башҡорт урман тәьминәте һәм сауҙаһы идаралығында баш иҡтисадсы вазифаһын башҡара. Ғүмер буйы бер-береһенә сикһеҙ хөрмәт һәм һөйөү менән йәшәгән был ғәжәйеп пар техникумда уҡыған ваҡытта табышып ҡауыша. Әлеге көндә улар Чесноковка биҫтәһендә матур донъя ҡорған. 78-ен ҡыуған атаһы, 73 йәшен тултырған әсәһе ҙур хужалыҡты «ыһ» та итмәй алып бара, ихатаһын гөл итеп тота. Атаһының иркә ҡыҙы булып буй еткергән Эльвира теләгәненә ирешер өсөн кәртәләрҙе бар тип тә белмәй. Тыуғандан бирелгән ошо көс, ныҡышмалыҡ менән тик алға ынтыла ул.*



podpiska.pochta.ru

## Ҙур тормошҡа юл

Наил ағаһы менән бергә электричкала йөрөп, 5-се класҡа тиклем Өфөнөң 1-се башҡорт мәктәбендә (хәҙерге 20-се башҡорт гимназияһында) белем ала ҡыҙыҡай. Йәйге каникулдарын улар ғәҙәттә йәмле Йүрүҙән буйында урынлашҡан Ҡариҙел районының Яңы Бәрҙәш ауылында йәшәгән өләсәләрендә үткәрә. Ағаһы урта мәктәпте тамамлап сыҡҡас, Эльвира 6-сы класҡа Рәми Ғарипов исемендәге 1-се республика гимназия-интернатына уҡырға бара. Тап шул мәлдә ғаиләгә һупайлы бисҭәһенән фатир бирәләр. Ауыл ҡыҙҙары араһында ҡалала, етеш ғаиләлә үҫкән Эльвира айырылып тора, бөхтә, зауыҡлы кейенә. Ул бер ҡасан да көсләрәктәрҙең көсһөҙҙәрҙе ҡыйырһытыуына юл ҡуймай, ғәҙелһеҙлекте күрһә, дөрөҫлөктө яҡлап сыға. Үҙендәген әхирәттәре менән бүлешә. Уларҙың да үҙе кеүек белемгә ынтылыуын, ҡалышмауын теләй. Һабаҡташтары хәтеренә ул шулай уйыла.

Өлгөргәнлек аттестаты алғас, БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетының башҡорт-инглиз бүлегенә уҡырға инә. Бер курста интернаттан алты кеше тура килә: барыһы ла тик яҡшы өлгәшкән, әҙерлекле уҡыусылар. Мәктәптә саҡта ул хәтлем аралашмаһалар, бында бигерәк тә яҡынайып китә һабаҡташтар. Университетта Эльвира алты йыл буйы төркөмдөң старостаһы була. Бөтә изге башланғыстарға ул тәүләп тотона, һабаҡташтары өсөн тауҙай ҡалҡа, кемдең ниндәй фәндән билдәһе ҡуйылмаған, кемгә ниндәй ярҙам кәрәк — барыһы ла уның йөрәге һәм ҡулы аша үтә. Һабаҡташтарын өйөнә алып ҡайтһынмы, күргәҙмәләргә йөрөтһөнмө — бындай эштәр уның лидерлыҡ сифаттарын раҫлай ғына бара. Имтихандар алдынан төркөмдәштәре өсөн репетиция үткәреүен әле һаман йылы тәьҫораттар менән иҫкә алалар.



**Ғаймалетдиновтар ғаиләһе**

Уҡыуҙы тамамлағас, бер йылдан, Эльвира кейәүгә сыға. Улар студент ваҡытта уҡ буласаҡ ире менән дуҫлаша, бергә эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнәләр. Ҡыҙҙың күңеле яҡҡан егет — Илгиз Ғаймалетдинов — Шишмә районы Иҫке Муса ауылынан, шағир Муса Ғәлиҙең ҡустыһы булып сыға. Ул Эске эштәр министрлығы мәктәбен тамамлап, милицияла эшләгәндән һуң, эшҡыуарлыҡҡа йүнәлеш ала. Тап ошо мәлдә киҫешә уларҙың юлдары. Башта егет баҙарҙы балыҡ менән тәьмин итеү йүнәлешен һайлаһа, бер аҙҙан Эльвира менән ит сауҙаһына тотоналар. Тере мал һатып алып, уны һуйып, баҙарға сығарыу ҡатын-ҡыҙҙың, ҡала ҡыҙының хәленән килмәҫлек кеүек, эйеме?! Ә Эльвира шул үҙенә билдәһеҙ эште рәхәтләнеп атҡара. Берәй ресторанға стейктар, деликатестар кәрәк икән, ҡыҙыҡай тиҙ генә уларҙың заказын үтәй һала. Шул рәүешле ул сауҙа өлкәһенә үтеп инеп, уны ситтән ҡарап түгел, эсендә ҡайнап өйрәнә. Эш барышында тап ошо егет менән тормошта еңелгә тура киләсәген төшөнә һылыу. Ике йәш йөрәк араһында һөйөү уты ҡабына. Эльвира Илгиздең кәләше булырға ризалығын бирә.

## Улдары — тормош мәғәнәһе

Өйләнешкәндән һуң Өфөлә бер бүлмәле фатир һатып ала йәштәр. Әле генә уйлай: ниңә



podpiska.rusprofile.ru

шунда уҡ өс бүлмәлегә ынтылмағандарҙыр? Икәүҙән-икәүһенә етә, тигәндәрҙер инде ул ваҡытта. Балалары булып китеүен уйламағандарҙыр. Һигеҙ йылдан һуң, 2005 йылда — Камил, 2009 йылда Ислам улдары донъяға килә. Эльвираның БДУ-ның Хоҡуҡ институтында юридик белем алыу мәле лә бала менән өйҙә ултырған осорға тура килә. Декрет ялынан һуң ул Һупайлы биҫтәһендәге сауҙа комплексына администратор булып сыға. Дүрт йылдан Эльвира Фаил ҡыҙын ошо баҙарҙың коммерция директоры итеп тәғәйенләйҙәр. Бик ауыр, яуаплы йөккә ихлас егелә йәш ҡатын. Килешеүҙәр, кешеләр менән эшләү яуаплылығын ул үҙ иңендә татый. Юғары хеҙмәт хаҡы түләнеүе, белемен үҫтереүҙе хәстәрләүҙәре өсөн шул коллективына рәхмәтле Эльвира. Балалар ҙурая килә ваҡыт та, йыйған тәжрибә лә үҙ эшен асыу хаҡындағы хыялды нығыта.

Инглиз телендә аралаша алыуы сәйәхәткә барғанда үҙен иркен тойорға ярҙам итә. Тел белгән кешегә сит ҡитғалар ғына түгел, башҡаларҙың буйы етмәҫ белемдәр ҙә асыҡ бит. Әсәһенең сит ҡитғаға китеп йәшәү теләгенә ҡаршы тороуын әле үҙе аңлай. Улы Мәскәүҙә уҡыу хыялын әйткәс, ҡәҙерлеһен нисек ситкә ебәрермен тип ҡото осоп уйлай. Ысынында һәр әсәйҙең башынан үтә был һорау. Балаларыбыҙҙың үҫеп еткәнен, уларға ирек бирергә кәрәклеген беҙ күрмәгәнеш, һыҙланыу аша аңлайбыҙ икән шул.

Тәүге алған һөнәре буйынса эшләргә тура килмәһә лә, яҙмышынан ҡәнәғәт Эльвира. Тормош иптәше Илгиз Зәкәриә улы менән ҡулға-ҡул тотоношоп бергә барыуҙары, ҡуйылған һынауҙарҙы, мөхәббәттәрен сайпылтмай, лайыҡлы үтеүҙәре лә — бер-береһенә хөрмәттән, һөйөүҙәренә тоғролоҡтан.

Эльвираның тормош энергияһы уны мәлендә йылдам булырға этәрәләр. Һәр эше йәшен тиҙлегендә башҡарыла. Алдына алғанын да ул һүҙып йөрөмәй тормошҡа ашырырға ғәҙәтләнгән. Был сифатты тәрбиәләп тә, «шулай кәрәк» тип кенә тырыш-тырып та булмайҙыр. Әйтәйек, уның бер төн эсендә кофта бәйләп кейеүе — үҙендә ҡайнаған хистәрҙе, сикһеҙ мөхәббәтте ауыҙлыҡлай алыуы, үҙ энергияһына, йылылығына үҙе хужа икәнлегенә бер дәлил. Иҙәндәге сүпте күрһәң, һауалағы йондоҙҙар юғала шул ул. Юғары маҡсаттар ҡуйып, башланған эшенең уңышлы сығырына

**Улдары – Хоҙай бүләге. Балалар тыуһын өсөн ниндәй тырышлыҡ һалыныуы хаҡында ул үҙе генә белә. Ғәзиздәре өсөн Эльвира рәхмәтле. Әсәлек хистәрен татыу – ҡатын-ҡыҙ өсөн иң-иң ҙур бәхеттәрҙең береһе, һәм ул был уңышҡа етди һынауҙар һәм ныҡышмалыҡ аша килгән.**

ышанып алға бара һәм уға өлгәшә Эльвира. Әлеге ваҡытта ике улы ла 3-сө лицейҙа белем ала, олоһо 11-сене тамамлай, кесеһе 6-сы класта уҡый. Камил табип булырға хыяллана. Ике улының да олимпиадаларҙа призлы урындар алыуы, яҡшы өлгәшеүе, буш ваҡыттарында бейеү, спорт менән шөғөлләнеүе — ата-әсәнең балаларын ҡарауға күп көс түгеп, һәйбәт тәрбиә бирергә ынтылыуҙарынан да. Улдары — Хоҙай бүләге. Балалар тыуһын өсөн ниндәй тырышлыҡ һалыныуы хаҡында ул үҙе генә белә. Ғәзиздәре өсөн Эльвира рәхмәтле. Әсәлек хистәрен татыу — ҡатын-ҡыҙ өсөн иң-иң ҙур бәхеттәрҙең береһе, һәм ул был уңышҡа етди һынауҙар һәм ныҡышмалыҡ аша килгән.

Эльвира — балалары өсөн йәнен фиҙа ҡылыр, көн-төн уларҙы хәстәрләр уңған әсәйҙәрҙең береһе.

## Ҡулдарынан гөлдәр тама

Ғаймалетдиновтар Зубово ауылында өй төҙөгән. Үҙ ерен ожмах баҡсаһына әйләндереүсе лә — Эльвира. Был эште лә ул еренә еткереп, рәссам-дизайнерҙарса башҡара. Уңышты ла үҙ ҡулдары менән үҫтереп ала. Тормош иптәше Илгиз дә эшһөйәр. Хәләл ефетен бер ҡараштан аңлап тора ул. Ир кешенең әйткән һүҙендә тороуы, ҡатын-ҡыҙға хөрмәт менән ҡарауы, мал табыуы — бәхет өсөн мөһим һәм ирҙе ир иткән төп талап, ти Эльвира.

Улар икеһе эшҡыуарлыҡтың ике тармағы буйынса киткән: Илгиз транспорт өлкәһен үҙ итһә, Эльвира аҙыҡ-түлек магазиндары асҡан. Уның тырышлығы менән Өфө янындағы барлыҡ бәләкәй ҡасабаларҙа йәмғеһе 14 «Тәмле ихата» («Вкусный дворик») сауҙа нөктәһе барлыҡҡа килә. Халыҡты сыр, деликатестар, һөт ризыҡтары, икмәк кеүек аҙыҡ-түлек менән тәьмин итә улар.

Ире бөтөнләй икенсе өлкәлә уңышлы эшҡыуар булып танылыуына ҡарамаҫтан, ҡатынына ихлас ярҙам итә. Техника ватылһа йә башҡа ауырлыҡтар тыуһа, көслө заттың ғына ҡулынан килерҙәй эштәрҙә иңен ҡуя ул Эльвираға.

Эшендәге ирекле график, үҙенә үҙе хужа булып, күп ваҡытын иренә, балаларына, ата-әсәһенә бағышлай алыу мөмкинлеге биреүенә һөйөнә Эльвира. Тимәк, ваҡытында икеләнмәй дөрөҫ ҡарар иткән.

Эльвира өсөн бәхет — үҙең менән килешеп йәшәү. «Һөҙөмтә башта үҙеңә ҡәнәғәтлек килтерергә, эшләгәнең иң тәүҙә үҙеңә оҡшарға тейеш», — ти ул. Иң ҙур хыялы — һау булыу. Сөнки сәләмәт кеше күпкә һәләтле. Етди һынауҙар аша үткән

podpiska.pochta.ru

кеше генә һаулыҡтың ҡәҙерен аңлай һәм уны беренсе урынға ҡуя торғандыр.

«Уңыш нигеҙе — гел үҙ өҫтөңдә эшләү. Өлгәшелгәндәргә таянып алға барыу, үҫеш — уңышҡа илтеүсе аҙымдар. Эҙләгән кеше һәр ваҡыт таба», — ти ул.

«Көс юғалтҡанымды, уның кәрәклеген тойһам, 5-6 көнгә ҡайҙалыр ял итергә осам, — ти Эльвира. — Яңы һулыш алырға, икенсе күҙлектән ҡарап, һығымталар яһау өсөн туйғансы йоҡлау ҙа етә». Йәй көндәре еләк бешкәндә, урманға барып, биҙрә тултырып емеш йыйып ҡайтҡанда ла көс өҫтәлеүен тоя ул. Туҡтауһыҙ көсөргәнеш эсендә йәшәү кешене ҡаҡшата шул. Әйтәйек, гел генә эштәр көйләнеп бармай. Мәҫәлән, иртән өс һыуытҡыстың сафтан сығыуын хәбәр итәләр. Кисекмәҫтән уны йүнәтеү йәки алмаштырыу сараһын күрер кәрәк. Бындай хәлдәр бер бөгөн түгел, көн һайын сығып тора, ти эшҡыуар. Һатыусыларына лайыҡлы эш хаҡы түләү, хатта сауҙа нөктәһе табыш килтермәгән хәлдә лә, яҡшы хеҙмәткәр өсөн ул урынды һаҡлау — Эльвираның холҡона ла, булмышына ла тура килгән ҡарар.

Уның штатында әлеге көндә 26 кеше эшләй. «Ике аҙна эсендә 100-әр мең һум эш хаҡы алған һатыусылар бар», — ти эшлекле ханым. Аҡса тип күҙе тонғандарҙан түгел ул. «Бол да — энергия. Уның хәрәкәте туҡтамаҫҡа тейеш. Йомартлыҡ уны мулҡыта, тулыландыра», — тигән фекерҙә эшҡыуар ҡатын.

## Өй йылыһы

Ғаиләләге йылылыҡ әйберҙәргә, өйгә күсә. Уны ҡатын-ҡыҙ булдыра. Тәртип, бөхтәлек, гүзәллек аша йән бөтәйә, көс арта. Эльвираның әсәһе сәйлән менән картиналар сигергә ярата. Бик эшсән ҡатын ул. 15 сутый ерен гөл итеп тота. Иҫ китерлек итеп баҡса үҫтерә. Сүп күрмәҫһең уның биләмәһендә. Шул мәшәҡәттәре араһында үҙенең ҡатын-ҡыҙ икәнен дә онотмай. Ҡыҙына иркәләнеп кенә, уның иғтибарына төрөнөп кенә йәшәгән наҙлы әсәй ул.

Атаһы — алтын ҡуллы оҫта, хужалыҡтағы барлыҡ кәрәкле әйберҙәрҙе үҙе яһаған, сынъяһау донъяны үҙе төҙөгән.

Бер туған ағаһы Наил менән Рузилә еңгәһенең татыу ғүмер кисереүенә, уларҙың ҡыҙҙары Карина һәм Сәйҙә менән аралашып йәшәүҙәренә һөйөнә Эльвира.

Гел эш менән мәшғүл ҡатындарға «буш ваҡытта нимә менән шөғөлләнәһегеҙ?» тигән һорау биреү ҙә килешмәгән һымаҡ. Тик торған мәлдәре булามы икән? «Бассейнға йөрөйөм, йөҙөргә яратам. Дуҫтар менән аралашыуға ваҡыт табам, сөнки шундай мәлдәрҙә яңы фекерҙәр килә. Бергәләшеп күп эштәр атҡарырға, ял итергә, тормоштоң түмен тойорға мөмкинлектәр асыла», — ти Эльвира Фаил ҡыҙы.



Эльвираның әсәһе менән атаһы

Гүзәл заттың һөйөүе өйҙө йылы тота. Ниндәй генә ауыр эш башҡармаһын, өй йылыһы уға көс, дәрт биреп тора. Әгәр ул йөрәген киҫәктәргә бүлеп, өйөн ҡарауҙан тыш, кешеләр өсөн ҙур ғәмәлдәр башҡара икән, тимәк, уның донъяһында барыһы ла тәртиптә. Уның көсө, ҡөҙрәте, йылмайыуы барлыҡ Йыһанды йылытыуға етә. Эльвира ла йылмайып йәшәй. Бәхетле ҡатын, тип уйлайҙар, уға ҡарап. Ул шулай ҙа. Бәхеттең ҡәҙерен, хаҡын ул үҙе генә белә. Уға Хоҙайҙан бүләк ителгән, ата-әсәһе, тормош иптәше, улдары, яҡындары, хеҙмәттәштәре тарафынан ҡоршалған, иң мөһиме, ул был серле лә, ҡәҙерле лә ҡоролоштоң тотҡаһы үҙендә булыуын белә. Шуға ла һәр таңды Эльвира Фаил ҡыҙы яңы дәрт, көс менән ҡаршылай.

**Гөлназ ҠОТОЕВА.**
**Булат МАЛИКОВ** фотолары.



podpiska.pochta.ru

# Изге Рамаҙан

Рамаҙан — рәхмәт, мәғфирәт, сабырлыҡ айы, ризыҡтың ҡәҙерен, меҫкен етемдәрҙең хәлен, вафат булғандарҙың ҡәҙерен белә, сабыр итә, изгелек эшләй торған ваҡыт. *Аллаһ Собхана үә Тәғәлә Ҡөрьән Кәримдә: «Әй, иман килтергән бәндәләрем, сәләмәт, ғәйрәтле, көслө, ҡеүәтле, аҡыллы хәлегеҙҙә Рамаҙан айына ирешһәгеҙ, ураҙа тотоғоҙ»,* — тине. Йылда ун ике ай бар, шуның берәүһендә — Рамаҙанда — Аллаһ Тәғәлә беҙҙең имандарҙы, ихласлыҡты, уға булған мөхәббәтебеҙҙе аслыҡ менән һынай. Ҡайһы бер бәндәләр харамдан да тартына алмаған ваҡытта, беҙ хәләл булған икмәктәребеҙҙән, яратҡан ризыҡтан тыйылып, бер Алланың ризалығына өмөт итеп, ураҙа тотабыҙ, ас торабыҙ. Ләкин Рамаҙан айында ас тороу — аслыҡ түгел, ә һынау. Әбей-бабайҙарыбыҙ борондан иң ауыр ваҡыттарҙа, йәйҙең иң эҫе оҙон көндәрендә ураҙаларын ҡалдырмаған.

Рамаҙан айында саҙаҡа, фытыр саҙаҡаһы һәм зәкәт биреү бар. Уны меҫкендәр, етемдәр, ғәриптәр, тол ҡатындар һәм күп балалы ғаиләләр файҙаһына бирәләр. Күңелебеҙҙә ниндәй бысраҡ, хөсөтлөк, асыу булһа, уларҙы бөтөрәйек, бер-беребеҙҙе ғәфү итәйек. Йә, Раббым, һин ғәфү итеүсе зат, ғәфү итеүҙе һөйәһең.

Ни өсөн ураҙа тотабыҙ? Беҙ уны Аллаһ ризалығы өсөн тотабыҙ, уға иман килтерәбеҙ. Иман — ул Аллаһҡа, пәйғәмбәрҙәргә, фәрештәләргә, китапҡа, әхирәт көнөнә ышаныу. Иман — күңел сафлығы, таҙалығы. Иманы зәғиф булған кешенең ураҙа тоторға көсө етмәй. Ҡайһы берҙәр, ваҡытым юҡ йәки эшем күп, тип һылтана.

«Лә-илләһа-илаллаһү» тип иман кәлимәһен әйткәс, мосолман булабыҙ. Унан һуң аҡылыбыҙ бар икән — биш ваҡыт намаҙ уҡырға, һаулығыбыҙ бар икән — ураҙа тоторға, байлығыбыҙ бар икән — зәкәт бирергә тейешбеҙ. Хәлебеҙҙән килһә — хажға барыу фарыз.

Рамаҙан етеү менән, Йәннәт ҡапҡалары асыла, ә Йәһәннәм ишектәре ябыла, оло шайтандар быҒаулана («Мосолмандарға зарар итә алмаҫ», — тиелгән). Шайтандар быҒаулы булыу сәбәпле, Рамаҙан айында гонаһтар әҙәйә. Ябай кешеләргә лә, хатта иманһыҙҙарға ла ҡағыла был. Улар ҙа яуызлыҡ ҡылыуын кәметә. «*Рамаҙан айында сәләмәт һәр кем ураҙа тотһон, ә ауырыу йәки юлдағы мосафир быны башҡа ваҡытта ҡылһын. Аллаһ һеҙгә еңеллек теләй, ауырлыҡ теләмәй, — тиелә «Бәҡара» сүрәһендә. — Уның бөтә бойороғо һәм тыйыуы һеҙҙең тормошто еңеләйтеү өсөн эшләнә».* «Ҡөрьән, Аллаһ ҡануны менән йәшәү бер кемгә лә уңайһыҙлыҡ та, ҡыйынлыҡ та килтерә алмай. Ҡиәмәт көнөндә Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм һеҙҙең мосолман икәнегеҙгә шаһит булһын өсөн, һеҙ уның шәриғәтен ҡабул иттегеҙ. *Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм: «Кем бүләк өсөн түгел, ысын күңелдән ышанып ураҙа тотһа, уның элекке гонаһтары ла ярлыҡаныр»,* — тине.

Ислам ҡағиҙәләре буйынса, ураҙа таң атҡандан алып ҡояш байығанға ҡәҙәр айырым ғәмәлдәрҙән тыйылыуҙы күҙҙә тота. Улар — ашау, яҡынлыҡ ҡылыу, тәмәке тартыу, дарыу эсеү йәки укол яһау, насар һүҙ әйтеү, шаулау. Әгәр ҙә һеҙҙән берәйһе мыҫҡыллап көлһә йәки әрләшһә, уға: «Мин ураҙа тотам», — тиегеҙ. Аллаһ Тәғәләгә яҡшы эштәрегеҙҙе күрһәтегеҙ. Хәҙис Шәрифтә пәйғәмбәребеҙ, Рамаҙан айының беренсе ун көнө — рәхмәт; икенсе ун көнө — гонаһтарҙан пакланыу; һуңғы ун көнө — уттан һәм йәһәннәм ғазабынан ҡотолоу көндәре, тине.

Ураҙаның беренсе көнө, ҡояш ҡалҡырға ике сәғәт алда сәхәр ашын тамамлап, фарыз ураҙаны тотоу өсөн ниәт ителә: «*Бисмилләһир-рахмәнир-рахим. Нәүәйтү ән әсууме саумә шәһри рамаҙаанә минәл фәжри иләл-мәғриби хаалисал лилләәһи тәғәәләә. Аллаһү әкбәр». Мәғәнәһе: «Аллаһ Тәғәлә өсөн тип ихласлыҡ менән таң атҡандан башлап ҡояш батҡанға тиклем Рамаҙан ураҙаһын тоторға ниәтләнем. Аллаһү әкбәр».*

Әгәр бер кеше Рамаҙан айында ахшам, йәстү үә тәрәүих намаҙҙарын йәмәғәт менән уҡыһа, уға Аллаһ Тәғәлә ҡәҙер кисенең һауабын бирер. Ҡәҙер кисе ошо рәүештә инер: бик эҫе һәм бик һыуыҡ булмаҫ, ул кистә болот та, ел дә иҫмәҫ, ҡар-ямғыр яумаҫ, һауала йондоҙҙар ҙа атылмаҫ һәм ул кистә барса һыуҙар татлы булыр.

Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм Мостафаға Ябраил фәрештә арҡылы Ҡәҙер кисе көнө Ҡөрьән инә башлаған. Кем дә кем шул кисәлә зекер әйтеп, тәһәжжүд намаҙҙарын төн уртаһында тороп уҡып, сәхәр ваҡытында доға ҡылып, Аллаһтан һораһа, ул бәндәнең доғалары ҡабул ителер.

Мөбәрәк көн һәм кистәрендә намаҙ уҡыуҙың иң яҡшыһы — төндә тороп уҡылған тәһәжжүд намаҙы (Мөслим, 2812). Рәсүлебеҙ Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм витр намаҙын һәр ваҡыт тәһәжжуд намаҙынан һуң ҡылған. Тәһәжжуд намаҙы төндөң икенсе яртыһынан таң атҡансыға ҡәҙәр, 2, 4, 6 рәҡәғәттән алып, 12-гә тиклем уҡыла. Ул өйлә намаҙының 4 рәҡәғәт сөннәт намаҙы кеүек башҡарыла. Беренсе ике рәҡәғәттә «Фатиха» сүрәһенән һуң — «Иннә әнзәлнәәһү» сүрәһен, өсөнсө һәм дүртенсе рәҡәғәттәрҙә «Фатиха»нан һуң «Кәәфируун» сүрәһен ҡушыу сауаплы.

Мөхәррәм, Шағбан, Шәүүәл айҙарында ла ураҙа тотоу ғәҙәте бар. Рамаҙан айынан башҡа бөтөн ураҙалар нәфел (нәфилә), йәғни өҫтәмә, үҙ ихтыярың менән тотолған ураҙалар тип һанала. Уларҙы сөннәт ураҙа тип тә атайҙар.

**Дилә БУРАНҒОЛОВАНЫҢ**
«Дини байрамдар» китабынан
ҡыҫҡартып алынды.

polpiska.pochta.ru

# УҢЫШ БАШЛАНҒЫСЫ – МӨХӘББӘТ



*Ауыл ерендә төпләнеп, заман ауырлығына, эш юҡлығына зарланмай, үҙ көсө менән шәхси хужалығын булдырған һәм ең һыҙғанып донъя көткән ғаиләләр һоҡландыра. Бөрйән районының Килдеғол ауылында матур итеп балалар тәрбиәләгән, хеҙмәттә лә, йәмәғәт эштәрендә лә әүҙем Сажиҙә менән Илдус Билаловтарҙың күркәм ғаиләһен ошо төбәктең йәме, ҡото, тиергә була. Ә баҫҡан ерендә осҡон сәсеп торған, йөр һүҙле, һәр йәһәттән өлгөр һәм булдыҡлы Сажиҙә Вәлит ҡыҙы – милләтебеҙҙең йөҙөк ҡашылай һылыу заттарыбыҙҙың береһе.*

Бөрйән районының Мораҙым ауылында Рәйлә менән Вәлит Айытбаевтарҙың ишле ғаиләһендә өсөнсө бала булып донъяға килә Сажиҙә. Айнур, Руслан ағалары, Рәмилә һеңлеһе менән Ғәни ҡустыһы – бер туғандар бәләкәстән бер-береһенә дуҫ, таяныс булып буй еткерә. Үҙ ауылында тулы булмаған урта белем алғандан һуң, уҡыуын Байназар урта мәктәбендә дауам итә ҡыҙ. Ҡырмыҫҡалының 143-сө һөнәри училищеһында ауыл хужалығы бухгалтерына уҡығас, ситтән тороп Һамар ҡалаһында Поволжск информатика, радиотехника һәм элемтә институтының элемтә колледжын тамамлай.

Килдеғол ауылындағы уңған Билаловтар ғаиләһенә килен булып төшә Сажиҙә. Ҡәйнәһе Кәримә Маҙһар ҡыҙы менән ҡайныһы Фәрит Шаһимырҙан улы өрләктәй алты ир бала тәрбиәләп үҫтергән. Килен ҡәйнә тупрағынан ярала, уңған ҡатын ул таба, тигәндәй, Сажиҙә Вәлит ҡыҙы тормош иптәше Илдус Фәрит улы менән береһенән-береһе отҡор биш улға ғүмер биргән. «Тормош иптәшем менән Йәштәр йылында таныштыҡ, Ғаилә йылында өйләнештек, Бала йылында беренсе улыбыҙ тыуҙы. Өс йыл ҡайны-ҡәйнә менән бер ихатала, бәләкәй өйҙә йәшәнек. Ҡәйнәм егәрле ине, эшһеҙ ултырманы. Мине оло еңгәйҙәргә ҡаҙ өмәһенә ебәргәне әле лә хәтеремдә. Ҡулыма ҡуҙ үтеген тотторҙо ла, унда килендәр уңған, бирешмә, тине. Тәүге биш айлыҡ ҡына улыбыҙҙы ҡарап ҡалды. Шул өмәгә барғандан бирле ярышып эшләйем, сәмләнеп йәшәйем. Ул ваҡытта ла иң күп ҡаҙ йолҡоусы мин булдым. Ҡәйнәмә рәхмәт, күңелемә дәрт өҫтәп, сәм орлоғо сәскәнгә, тынғыһыҙ ғүмелем мине әле лә алға әйҙәп тора», – ти Бөрйән һылыуы.

Йәштәр ауыл осондағы тау итәгендә иркен йорт һалып сыға. Илдус колхозда –

шофер, ә Сажиҙә почта бүлексәһендә эшләй, гәзит-журнал тарата.

«Атай-әсәйҙән әллә ни байлыҡ яҙманы. Яҡындарыбыҙҙың бары рухи ныҡлығы, тырышлығы, донъяны яратыуы беҙгә лә күсеп, йәшәргә көс-ҡеүәт биргәндәр. Хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләп, олоно — оло, кесене кесе итеп йәшәргә өйрәтте улар. Атай аҙ һүҙле, һынап ҡына ҡарап — бер, әммә берәгәй әйтер кеше ине. Колхоз хеҙмәтендә көс түгеүҙән тыш, балалар өсөн сана, ат саналары, хатта ярыш өсөн махсустарын да яһаны, һалабаш әҙерләй, тал һыҙырып, ҡайын ороһо (чага) йыйып та тапшыра торғайны. Ҡурайҙа оҫта уйнаны, моңло итеп йырлай ине. Әсәйебеҙ сабыр, тыныс холоҡло, туған йәнле, тормошто ратҡан гүзәл кеше булды. Һаулығы ҡаҡшап, дауаханала йыш ятһа ла, зарланманы. Бишебеҙҙе лә аяҡҡа баҫтырып, оло тормош юлына сығарҙылар. Тик шуныһы үкенесле: үҙҙәре өсөн йәшәй алманылар: әсәй — 50, атай 54 йәшендә генә донъя ҡуйҙы, — тип һыҙланыуы менән бүлешә яғымлы ханым. — Атай нигеҙендә яңы өй һалып, кәләш алып, ҡыҙҙары тыуғанына һөйөнөп, тормош көтә генә башлаған ҡустыбыҙ Ғәнизең былтыр яман ауырыу менән арабыҙҙан китеүе лә барыбыҙҙы ҡабат тетрәтте», — тип күҙ йәштәрен һөртә ул.

Ҡәйнәһе менән ҡайныһы 22 ейән-ейәнсәр, туғыҙ бүлә-бүләсәр һөйөүен татып, тигеҙ ҡартлыҡ кисереп, бер-бер артлы мәрхүм була.

2006 йылда Сажиҙә Вәлит ҡыҙы менән Илдус Фәрит улы Билаловтар, ауылда магазин булдырып, шәхси эш асып ебәрә. Эшләһәң, эш ҡарышмай: ҡура тултырып мал-тыуар, ҡош-ҡорт үрсетәләр, баҡсаларында йәшелсә, емеш-еләк ишелеп уңа. 2017 йылда дәүләттән субсидия ярҙамы алып, крәҫтиән-фермер хужалығы ойошторалар. Йылҡы үрсетәләр, 20 баш һыйыр малы тоталар. Хужалыҡтары урман эше менән дә шөғөлләнә, пилорамдары бар. Халыҡҡа бура бурарға, таҡта ярырға, утын әҙерләргә ярҙам итә Билаловтар. Бер нисә кеше штатта иҫәпләнһә, миҙгелле эш ваҡытында өҫтәмә хеҙмәт урындары ла булдырыла. Илдус Фәрит улы үҙҙәренең «Белорусь» тракторы менән ауылдаштарына ер һөрә, бесән йыйыша. Өйҙә атай абруйы ҙур — уландарының аталарына оҡшарға тырышыуы, эшкә маһирлығы ошо хаҡта һөйләй. «Атайым маҡсатлы, көслө ихтыярлы, тырыш, беҙ ҙә унан өлгө алабыҙ», — ти егеттәр.

«Үҙемә иптәшкә ҡыҙ табам, тип бер футбол командаһы ойошторорлоҡ малайҙар үҫтерҙек. Бер-береһенә терәк, имен-һау булһындар. Шуныһы ҡыҙыҡ: беҙҙә — биш ул, ә һеңлем Рәмилә дүрт ҡыҙ тәрбиәләй. Улар беҙҙе — 23 февраль, ә беҙ уларҙы 8 Март менән ҡотларға йөрөшәбеҙ. Был үҙенә күрә изге йолаға әйләнгән, — тип йылмая бәхетле әсә. — Оло улым Илнар, Белорет Металлургия техникумын тамамлап, әрменән кесе сержант дәрәжәһендә ҡайтты, әле Белоретта эшләй. Ҡолғана ауылынан кәләш алды. Киленебеҙ Әлиә быйыл Белорет педагогия колледжын тамамлай. Үткән йәй йәштәргә, матур итеп туй үткәреп, Белорет ҡалаһынан шәхси йорт бүләк иттек. Икенсе улыбыҙ Илсур, БДПУ-ның менеджментта ғәмәли информатика бүлегенең беренсе курсын тамамлап, әрмегә барып ҡайтып, әле Өфөлә эшләп тә, уҡып та йөрөй. Саръян менән Сәлим — туғыҙынсы, Ибраһим өсөнсө синыфта белем ала. Улдарым «дүрт» һәм «биш» билдәләренә генә өлгәшә. Ҡатынды йөҙөк ҡашы иткән — ир, тиҙәр халыҡта. Аллаға шөкөр, тормошомдан ундым, иремә рәхмәт. Бергә татыу, сәләмәт оҙон ғүмер итергә, балалар бәхетен күреп, ейән-ейәнсәрҙәрҙе һөйөргә яҙһын».


Илнар менән килене Әлиәнең туйында

Быйыл яҙ Сажиҙә менән Илдус Билаловтарҙың пар аҡҡоштар кеүек татыу донъя көтөүенә 25 йыл тула, Көмөш туйҙары айҡанлы уларға көмөштәй камиллыҡ, ныҡлыҡ теләйек! Хыялдары ғәмәлгә ашһын!

Сажиҙә байтаҡ йылдар инде Килдеғол ҡатын-ҡыҙҙар ойошмаһын етәкләй, эшҡыуар ауылда үткән сараларға бағыусылыҡ ярҙамы ла күрһәтә. Дәртле һылыуҙарҙың тырышлығы менән матур бәйгеләр: бәхет серен белгән парҙар араһында ойошторолған «Бергә-бергә ғүмергә», уңғандар ярышҡан «Бай баҡса», татыу йәшәгәндәр өсөн «Күрше хаҡы — тәңре хаҡы», рәхмәт белдерергә мөмкинлек биргән «Йөрәк һүҙе», шулай уҡ доға ятлау конкурстары, яҙлы-көҙлө йәрминкәләр, өмәләр, Ололар һәм Ауыл ҡатын-ҡыҙы көндәре гөрләп уҙа.

«Мәктәптәге Шыршы байрамына, ҡылығыма әйләнгән йола буйынса, башланғыс һәм өлкән кластар өсөн супер бүләктәр әҙерләйем. Балаларҙа мөғжизәгә ышаныс уятҡым килә. Матбуғатҡа һөйөүем көслө, гәзит-журналдарға яҙылып ҡына ҡалмай, оло теләк менән уларҙы таратышам. «Башҡортостан ҡыҙы» журналын Ололар көнөнә, тыуған көндәргә, ауыл кимәлендә үткәрелгән төрлө конкурс еңеүселәренә бүләк итәм. Яңыраҡ яратҡан журналымды улы махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан Хәлиҙә Яныбай ҡыҙы Исҡужинаға яҙҙырҙым», — ти үҙе лә нәфис һүҙгә ғашиҡ, шиғри күңелле ханым.

Алтын утта һыналыр, әҙәм эштә һыналыр, тигәндәй, әлбиттә, һәр башланғыста ла ышаныслы теләктәштәрең, ярҙамсыларың булыуы мөһим. Халҡым, тыуған яғым тип янған яҡташтарына, ҡатын-ҡыҙҙар ойошмаһы уңғандарына ла рәхмәтле Сажиҙә. Ошондай еңел булмаған осорҙа, бер тупҡа тупланып, ҡулдарынан килгәнсә тырышып изге эштәр атҡара улар. «Яңыраҡ махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы һалдаттарыбыҙға сираттағы ярҙамды йыйыуҙа ихлас күңелдән үҙ өлөшөбөҙҙө индерҙек. Бер өйҙә һалма йәйеп ҡырҡһаҡ, икенсеһендә ҡурмас ҡыҙҙырып талҡан йомарланыҡ. Егәрле килен-апайҙар күп ауылыбыҙҙа, һәр береһе маҡтауға лайыҡ!» — ти Сажиҙә Вәлит ҡыҙы. Гөрләп йәшәй килдеғолдар. Ололар ураҙа тота, аят аштарына саҡырыша, хәйер-саҙаҡа тарата, намаҙ уҡығандарҙың сафы ла тулылана — йәштәр эйәрә. Яңыраҡ күмәкләшеп, донъяла именлек урынлашыуын, һуғышта йөрөгән һалдаттарҙың иҫән ҡайтыуын теләп, салауат әйткәндәр, доға ҡылғандар.

Сажиҙә Билалованың намыҫлы хеҙмәте бихисап диплом-грамоталар, Маҡтау хаттары менән билдәләнгән. «Әсәлек даны» миҙалына ла эйә ул. 2020 йылда уға «Хеҙмәт ветераны» исеме бирелгән. Ошондай илһөйәр, эшһөйәр, мөхәббәтле ғаиләләр, йәшәйешебеҙҙе сихри ҡөҙрәт менән балҡытып, яҡшы эштәргә дәртләндерә, тыуған яғын байыта, данлай.

**Альбина ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА.**
**Илмир БИЛАЛОВ** фотоһы.
Бөрйән районы.

podpiska.pochta.ru

# СИБАЙҘАРҘЫҢ МОҢ СУЛПЫҺЫ

podpiska.pochta.ru

*Сибай — Урал аръяғының йөҙөк ҡашы, мәҙәниәт усағының ҡояшы ул. Исеменән дә, есеменән дә моң сайпылған ҡаланы, хаҡлы рәүештә, борондан килгән йолаларҙы, йыр-моңдо тукмәй-сәсмәй һаҡлаусы, быуындар бәйләнешен өҙмәй, халыҡ ынйыларын тағы ла нурлырак балҡытыусы милли гәүһәребеҙ тип атарға мөмкин. Дәртле, сая, ирәбе сибайҙарҙы сит яҡта ла беләләр, үҙ итәләр, көтөп алалар.*

Ысынлап та, үҙ эшенә мөкиббән, асыҡ күңелле, йыр-моңға ғашиҡ, егәрле кешеләр йәшәй бында. Сибай ҡалаһының мәҙәниәт бүлеге етәксеһе **Элиза Ғүмәр ҡыҙы Кирәева** әйтеүенсә, 2022 йыл ябай булмаған. Шуға ҡарамаҫтан, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре үҙ иңдәренә йөкмәтелгән бурысты намыҫ менән үтәгән, Мәҙәни мираҫ йылына арналған мәртәбәле саралар ҡала кимәлендә күп уҙғарылған. «Халыҡты йыр-моңға, аң-белемгә, ижадҡа, китапҡа ылыҡтырыу буйынса үткән йыл айырыуса әһәмиәтле булды, — ти ул, әңгәмәбеҙҙе башлап. — Ағымдағы йылда ҡаланың рухи тормошон иһә Сибайҙың бренды булған башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың төбәк-ара «Ирәндек моңдары» бәйгеһе биҙәйәсәк. 16-сы тапҡыр үткәреләсәк мәртәбәле конкурс бөтә республиканың, хатта илебеҙҙең төрлө төбәктәренән һәүәҫкәр һәм профессиональ йыр башҡарыусыларҙы йыясаҡ. Сибай ҡалаһында





Гүзәл Баянова



Флорида Ҡәҙерғолова



Минзәлиә Хәлитова

төрлө ведомствоға буйһонған мәҙәниәт учреждениелары эшләй: Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт драма театры, Сибай концерт-театр берекмәһе, Сибай сәнғәт колледжы һәм Өфө урта махсус музыка колледжының Сибай филиалы — республика ҡарамағында. Ә Халыҡ мәҙәниәте һәм ял үҙәге, ҡаланың үҙәкләштерелгән китапханалар селтәре (уға ун филиал инә, алтыһы — модель китапхана), Тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейы, балаларҙың сәнғәт, һынлы сәнғәт, музыка мәктәптәре, мәҙәниәт һәм ял паркы — ҡала хакимиәте иҫәбендә».

Сибайҙар балалар һәләтен үҫтереүгә, киләсәк быуынды ҡайғыртыуға күп көс һала. Быны бәләкәй ҡала бер түгел, өс сәнғәт мәктәбенең эшләүе лә раҫлай. 1992 йылда асылған балалар сәнғәт мәктәбен 17 йыл дауамында мәғариф алдынғыһы **Гүзәл Шәкирйән ҡыҙы Баянова** етәкләй. Бөгөн мәктәптә «Фортепиано», «Вокал», «Халыҡ музыка ҡоралдары», «Фольклор», «Театр», «Бейеү» йүнәлештәре буйынса өҫтәмә белем бирелә. Шулай уҡ инклюзив уҡытыу эшенә лә иғтибар ҙур. «Мәҙәниәт» милли проекты сиктәрендә уҡыу йортона яңы фортепиано, думбыра, баян, гитара, интерактив таҡта алынған. Сәнғәт мәктәбендә 458 бала уҡый. Уларға юғары һәм беренсе категориялы 21 уҡытыусы белем бирә, һигеҙ кеше административ вазифа башҡара. Үҙ теген цехы, тауыш яҙҙырыу студияһы, виртуаль концерт залы бар. 2022 йыл балалар сәнғәт мәктәбе өсөн ваҡиғаларға бай булған. «Мәктәптең 30 йыллыҡ юбилейы айҡанлы ҙур концерт ойошторолдо, китап баҫтырылды, балалар өсөн йәйге профилле лагерь эшләне, уҡыусылар, төрлө конкурстарҙа ҡатнашып, юғары урындар алыуға өлгәште», — ти Гүзәл Шәкирйән ҡыҙы. Рәсәй Федерацияһы Президенты грантының «Мәҙәни код» йүнәлешендә «Барыһы ла — һинең ҡулда» проекты менән еңеү яулап, Сибай балалар сәнғәт мәктәбе балсыҡтан әүәләү оҫтаханаһын да булдырған.

Гүзәл Шәкирйән ҡыҙы тормош иптәше Иршат Юлай улы менән Данияр һәм Тимерхан исемле уландар тәрбиәләй. Буш ваҡытында һүрәт төшөрөргә, балалар өсөн йырҙар ижад итергә ярата. «Күңелдәрҙән моң тама», «Башҡортостан — мин, һин, ул!», Әлнисә Алдырхованың «Өләсәйем һандығы» исемле китаптарында балалар өсөн яҙылған йырҙары тупланған. «Яҙ һулышы», «Халыҡ батырлығы быуаттарҙа йәшәй» («Подвигу народа жить в веках») конкурстарын баһалауҙа ҡатнашһа, «Ҡатын-ҡыҙҙың бәхет биләмәһе» асыҡ академияһында әүҙем ойоштороусыларҙың береһе ул. Ә яңыраҡ Гүзәл Шәкирйән ҡыҙы «Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре» тигән маҡтаулы исем алып, эшенең емешен татып һөйөнгән.

Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Илүзә Йыһанур ҡыҙы Хоҙайғолова** Балалар музыка мәктәбен 2009 йылдан етәкләй. Ошо белем усағында үҙе ҡанат нығытҡан ханым янына балаларҙың музыкаль һәләтен күрә, аса, үҫтерә белгән тәжрибәле коллектив туплаған. Һәр ҡайһыһы — һөнәрен яратҡан, талапсан хеҙмәткәр. Тормошон киләсәк быуынға белем биреүгә арнаған, фортепианола оҫта уйнаған ижадкәр Илүзә Йыһанур ҡыҙы — ҡаланың йөҙөн билдәләүсе ҡатын-ҡыҙҙарҙың береһе. Буш ваҡытын әүҙем ял итеүгә бағышлай ул, туризм күңеленә яҡын, Башҡортостан йылғалары буйлап һалда ағып төшөүгә өҫтөнлөк бирә.

**Флорида Фиолит ҡыҙы Ҡәҙерғолова** 2015 йылдан алып Сибай балалар һынлы сәнғәт мәктәбе директоры вазифаһын башҡара. Тормош һынауҙарын аҙ кисермәгән Флорида Фиолит ҡыҙы яратҡан һөнәренән йәм-тәм табып, күңел һалып, ең һыҙғанып эшләй. Һәләтле балаларҙы үҫтереүгә күп көс түккән етәксе яңы, матур бинала зауыҡлы, бай күргәҙмәләр ойоштороп, Рәсәй кимәлендә ҙур еңеүҙәргә лә өлгәшкән. Ире Марат Юлай улы менән 20 йылдан ашыу донъя көтәләр, Кәрим һәм Нәйлә исемле ике балаға ғүмер бүләк иткәндәр.

Уңған ҡатын ғаиләһен тәмлетатлы бешереп һыйларға ярата. Ҡышҡы оҙон кистәрен иһә китап уҡып ҡыҫҡарта. «Һәр яҙма фекерләүгә этәрә һәм мейене эшләтә. Хәҙерге заманда китап уҡыусылар һаны ҡырҡа кәмеһә лә, китап үҙ

podpiska.pochta.ru



Гөлиә Нәҙерғолова



Илүзә Хоҙайғолова



Элиза Кирәева

әһәмиәтен юғалтмай, тип исәпләй эшлекле ханым. Уның күңеленә классик әҙәбиәт һәм тарихи яҙмалар яҡын.

— Сибай ҡалаһы Халыҡ мәҙәниәте һәм ял үҙәге муниципаль бюджет мәҙәниәт учреждениеһында 2005 йылдан эш башланым, ә директор йөгөн 2011 йылдан алып тартам, — ти тағы ла бер рухлы етәкселәрҙең береһе **Гөлиә Рәхимйән ҡыҙы Нәҙерғолова.** Тормош иптәше, сәнғәт мәктәбендә балаларға ҡурай серҙәрен өйрәткән Илмир Амур улы менән 20 йыл бергә донъя көтөп, өс баһадир ул үҫтерә ижади ғаилә. «Ял көндәрен ғаиләбеҙ менән тәбиғәт ҡосағында үткәрергә тырышабыҙ. Төп эшемдән тыш, «Миләш» халыҡ вокаль ансамблендә шөғөлләнәм, өйҙә бешеренергә, ҡул эштәре менән булышырға, башҡорт нәфис әҙәбиәтен уҡырға яратам», — ти һылыуҡай. Һәр етәксе ғаиләлә, иң беренсе нәүбәттә, гүзәл ҡатын, наҙлы әсә булып ҡала барыбер.

Гөлиә Рәхимйән ҡыҙы хаҡында яҡташтары: «Һәр мәҙәни сараның сағыу биҙәге булған ижади шәхес ул», — ти.

Сибай ҡалаһының тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейы директоры, тарих фәндәре кандидаты **Альбина Зөфәр ҡыҙы Ярмуллинаны** белмәгәндәр һирәктер. Үҙ эшен юғары оҫталыҡ менән башҡарған, ғилми фекерле, алдынғы ҡарашлы, бар ергә лә өлгөр ханымдан сибайҙар уңған. Ул килеү менән Сибай музейының өр-яңы һулышы асылды, тиергә мөмкин. Тынғыһыҙ, эҙләнеүсән етәксе яңынан-яңы күргәҙмәләр, фәнни форумдар, төрлө саралар уҙғара. Тормош иптәше Хәсән Шәкирйән улы менән бөркөттәре — Иҙелбайҙың уңыштарына һөйөнөп йәшәй улар. Өфө дәүләт нефть техник университетын тамамлап, «ГазпромдобычаЯмбург» ойошмаһында белгес булып эшләгән егет Әлшәй һылыуы Алина Рәил ҡыҙы менән ғаилә ҡорған. Киң эрудициялы Альбина Зөфәр ҡыҙының яратҡан шөғөлдәренең береһе — китап уҡыу һәм волейбол уйнау.

«Сибай ҡалаһының тарихты һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейы — төбәктә генә түгел, республика кимәлендә лә иң яҡшылар рәтендә. Уҙған йыл беҙҙең өсөн бай һәм уңышлы булды. Мәҙәни мираҫ йылында Рәсәйҙә Башҡортостан Республикаһының Милли музейы, Ырымбур дәүләт аграр университетының этнография музейы, «Ағиҙел» художество кәсептәр дәүләт унитар предприятиеһы менән күргәҙмә проекттары ойошторҙоҡ. Сибай музейы фондынан «Мираҫ» исемле күргәҙмәне Силәбе өлкәһендә, Ханты-Манси автономиялы округында, 2023 йылда Ямал-Ненец автономиялы округында йәшәүселәр ҡарап ҡыуанды. Рәсәй музей фондының дәүләт каталогына 7066 предмет индерелде. Музейға 26000-дән ашыу кеше килде, 172 экскурсия үткәрелде, 21 күргәҙмә һәм унан ситтә 16 күргәҙмә проекты асылды, — ти етәксе музей эшмәкәрлеге хаҡында. — «Сибай музейының тыуған яҡты өйрәнеү яҙмалары»ның 9-сы сығарылышы донъя күрҙе, ул республикала тыуған яҡты өйрәнеү йүнәлешендәге берҙән-бер музей баҫмаһы булып тора. Музейыбыҙ Башҡортостанда «Мәктәп туризмы» проектында ҡатнашты, Хәйбулла, Баймаҡ, Йылайыр һәм Ейәнсура райондарынан 400-ҙән ашыу баланы ҡабул иттек. «Пушкин картаһы» буйынса 2,4 меңдән ашыу билет һатылды. Һуңғы йылдарҙа «Аҫалы балаҫ», «Самауыр ғаиләһе», «Тәмле» исемле конкурс-күргәҙмәләр йәнле үтә», — ти Альбина Зөфәр ҡыҙы.

Шулай уҡ Сибай үҙәкләштерелгән китапханалар системаһын телгә алып китмәү мөмкин түгел. 2018 йылдан уны абруйлы Баймаҡ ҡыҙы **Минзәлиә Самат ҡыҙы Хәмитова** етәкләй. 2022 йыл китапханалар өсөн бик әһәмиәтле ваҡиғаларға бай булған. Үсмерҙәр модель китапханаһы «Йәш әҙәбиәтселәр акселераторы» проектын тормошҡа ашырыуҙы тамамлаған. «2022 йылдың апрелендә уҙған йомғаҡлау семинарында проектта ҡатнашыусылар үҙҙәренең эштәре менән таныштырҙы, уларҙың иң яҡшылары «Бәхетле бала сағ» тип аталған айырым китап итеп сығарылды», — ти Минзәлиә Самат ҡыҙы. 2022 йылда Сибай ҡалаһы ойошмаһы «Бөтә Рәсәй инвалидтар йәмғиәте» менән берлектә әҙерләнгән «Донъяға тәҙрә» социаль проекты Президент гранттары Фонды иғлан иткән конкурста еңеүсе булды. 5-се китапхана-филиал базаһында тормошҡа ашырылған



podpiska.pochta.ru

проект сиктәрендә күреү һәләте буйынса инвалидтар өсөн объекттар һәм хеҙмәттәр менән файҙаланыу мөмкинлеген арттырыуға йүнәлтелгән бер нисә сара үткәрелде. Китапханала махсус ҡорамалдар һәм приборҙар ҡуйыу, һуҡырҙарҙы, насар күреүселәрҙе Брайль системаһы буйынса уҡыу техникаһына һәм компьютер белеменә өйрәтеү — был саралар уларға йәшәү сифатын яҡшыртырға мөмкинлек бирҙе һәм кәрәкле мәғлүмәт хеҙмәттәре күләмен алырға булышлыҡ итте. Сентябрҙә сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән уҡыусылар өсөн Сибай коррекция мәктәбе менән берлектә хоҡуҡи мәғлүмәт үҙәге хеҙмәткәрҙәре ойоштороған «Китапхана ирекмәне» проекты старт алды. Проектты тормошҡа ашырыу өҫтөндә эш алып барыла, һәм ул 2023 йылда ла дауам итәсәк.

Быйыл тыуған яҡты өйрәнеү модель китапханаһы нигеҙендә, «Башланғыс» гражданлыҡ йәмғиәтен үҫтереү үҙәге» коммерцияға ҡарамаған автономиялы ойошма менән берлектә әҙерләнгән «БиблиоТирмә» проекты Президент гранттары фонды конкурсында еңде. Проектты ғәмәлгә ашырыу 2023 йылдың 1 сентябренән башлана һәм 2024 йылдың мартына тиклем дауам итә. Уның һөҙөмтәһендә «Сәсән тирмәһе» мөйөшө «БиблиоТирмә» экспозицияһы рәүешендә реконструкциялана. Был проект башҡорт халҡының йолаларын, көнкүрешен һәм мәҙәни мираҫын һаҡлап ҡалыуға өлөш индерәсәк.

Учреждениеның өс рәсми сайты һәм 17 онлайн-майҙансығы эшләй. Бөтә сайттар аша Үҙәк китапхана системаһы каталогына инеү ойошторолған.

Минзәлиә ханымдың тормош иптәше Илдар Олег улы ҡотҡарыу отряды начальнигы булып хеҙмәт итә. Күркәм ғаилә ике бала тәрбиәләй. 20 йәшлек улдары Өфө Фән һәм технологиялар университетында өсөнсө курста белем алһа, ҡыҙҙарына — 15 йәш.

«Йәшләй генә мәҙәниәт өлкәһе арбаһына егелеп, ул йөктө арымай-талмай тартҡан, бөтә булмышын,



**Альбина Ярмуллина**

**Ҡатын-ҡыҙ һәм мәҙәниәт. Был ике төшөнсә, ысынлап та, бер-береһенән айырылғыһыҙ. Мәҙәниәтебеҙ йөҙөн бар яҡтан да дан булған гүзәл заттарыбыҙ биҙәй.**

ғүмерен мәҙәниәткә арнаған, олоһо һәм кеҫеһе өсөн дә үҙ кешеһенә әүерелгән **Сажиҙә Факил ҡыҙы Ғәниева** тик һоҡланыу, оло хөрмәт тойғоһо уята», — ти хеҙмәттәше хаҡында Элиза Ғүмәр ҡыҙы. Ысынлап та, тура һүҙле, талапсан, шул уҡ ваҡытта ярҙамсыл, һиҙгер йөрәкле нескә психолог та булған Сажиҙә ханымды Сибайҙа белмәгән кеше юҡтыр. Таң һарыһынан эшкә йүгереп, мәҙәни сараларҙың уртаһында ҡайнап, көн ярты төнгә ауышҡанда ҡайтып ингән хәләл ефетен аңлауы Ғәбит ағай — Сажиҙә ханымдың төп терәге, күңелдәше. Татыу ояла ике ул ҡанат осорған. Бөгөн бәхетле өләсәй һәм картатай оҙаҡ көтөп алынған һөйөү емеше — Камилә ейәнсәрҙәренең наҙына төрөнөп йәшәй. «Сажиҙә Факил ҡыҙы — алыштырғыһыҙ уң ҡулым, — тип һоҡланыуын белдерә етәксе һәм башҡа ярҙамсылары тураһында ҡанатланып һөйләй. — Мәҙәниәт бүлегендә оҙаҡ йылдар эшләгән, тоғро ярҙамсыбыҙ булған сәркәтибебеҙ **Светлана Георгиевнаны** телгә алып китмәү яҙыҡ булыр. Ипле, аҡыллы, белемле, ике ул үҫтергән Светланабыҙҙы хаҡлы ялға сыҡһа ла, ебәрмәйбеҙ, сөнки унһыҙ бер эште лә күҙ алдына килтереп булмай. Шулай уҡ йәш, ижади ҡарашлы, моңло тауышлы **Гөлгөнә Тләүсина,** беҙҙең өлкәлә яңыраҡ ҡына эшләй башлауына ҡарамаҫтан, отҡор һәм тырыш, заман технологиялары буйынса шәп белгес булараҡ, социаль селтәрҙәрҙә эшебеҙҙе алып бара. Тормош иптәше менән бик матур ғаилә ҡорҙолар, ике ул үҫтерәләр».

Мәҙәниәт, әҙәбиәт усағында кес кенә сағынан ҡайнап үҫкән Элиза Ғүмәр ҡыҙы Кирәеваның үҙ тормошон да ошо өлкә менән бәйләүе һис тә осраҡлы түгел. Әсәһе, абруйлы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың береһе, Баймаҡ ҡалаһында оҙаҡ йылдар китапхана директоры булып эшләгән Луиза Дәүләтшина йортонан яҙыусылар, сәнғәт кешеләре өҙөлмәй. Донъяһын ялт итеп тотҡан, көн оҙоно осрашыуҙар, төрлө саралар үткәреп, төндә иһә ғаиләһенә ашарға бешерергә өлгөргән уңған әсәһенең халыҡ өсөн янып эшләүгә һәләте ҡыҙына ла күскән. «Һуғыш ветерандары булған ике картатайым да халыҡ йырҙарын оҫта башҡарҙы, ҡурайҙа уйнаны», — тип хәтерләй ул. Ҡартәсәһе Хәмиҙәнең тәрбиә орлоҡтарын күңеленә һалып үҫкән, Сибай институтын тамамлаған тырыш ҡыҙ ошо уҡ уҡыу йортонда хеҙмәт юлын башлай. Белем усағында төрлө хеҙмәт баҫҡыстары үтә ул. «Эште урын-еренә еткерергә өйрәткән институт директоры Зиннур Йәрмөхәмәтовҡа оло рәхмәтлемен. Етәксе булараҡ, халыҡ менән эшләү һабағын мин тап унан алдым», — ти Элиза Ғүмәр ҡыҙы. Халыҡ ял үҙәгендә, һуңынан — балалар ял үҙәгендә етәксе булып ең һыҙғанып эшләгәндән һуң, Элиза Ғүмәр ҡыҙын Сибай ҡалаһының мәҙәниәт идаралығы начальнигы итеп үрләтәләр. Ҡатын-ҡыҙ өсөн иң ҙур бәхет, мөһим ғәмәл — әсә булыу, тип йылмая ул. Шуға ла хеҙмәткәрҙәренең хәлен аңлай үҙе лә Элина исемле матур ҡыҙ үҫтергән ҡатын. Ғаиләнең төп ҡыуанысы булған күҙ нурҙары 2-се синыфта уҡый, шулай уҡ музыка мәктәбендә шөғөлләнә, фортепианола уйнай, матур итеп бейей ҙә.

Ҡатын-ҡыҙ һәм мәҙәниәт. Был ике төшөнсә, ысынлап та, бер-береһенән айырылғыһыҙ. Мәҙәниәтебеҙ йөҙөн бар яҡтан да дан булған гүзәл заттарыбыҙ биҙәй. Беҙ быны сибайҙарҙың аҫыл өлгөһөндә лә күрҙек, тойҙоҡ һәм һоҡландыҡ.

**Айзилә МОРТАЕВА.**
Сибай ҡалаһы.

podpiska.pochta.ru



# КИҢ ОФОҠТАР СЕРЕН АСА УЛ

*Ғаилә ныҡлығы, йылдар үтеү менән мөнәсәбәттәрзең һүрелмәүе күп сәбәптәргә бәйле. Дөйөм ҡыҙыҡһыныуҙарҙың, мауығыуҙарҙың, йәғни хоббиның булыуы – шуларҙың береһелер. Өфөлә йәшәүсе Искәндәровтар, мәҫәлән, сәйәхәт ҡылырға ярата. Уларға шулай уҡ көстө тыуған төйәккә һөйөү бирә.*

Кеше – булмышы менән сәйәхәтсе. Туризм йылдам үҫешкән заманда күптәр тулы тормош менән йәшәүҙе ер-һыу гиҙеүҙән башҡа күҙ алдына ла килтермәй. Айрат Рим улы Искәндәров та шундайҙарҙан. «Китаптарҙан ғына уҡып белгән сит яҡтарҙы, хыялдарҙа ғына төҫмөрләнгән оло ҡитғаларҙы, кеше аяғы баҫмаған сихри ерҙәрҙе күреү теләге бала саҡтан уҡ күңелемдә шыткайны», – ти ул.

Ағиҙел йылғаһы буйында, Ҡырмыҫҡалы районының Үтәгән ауылында тыуып үҫкән Айратҡа тәбиғәткә һөйөү атаһынан күскән, тиһәк, яҙыҡ булмаҫ. Рәсәй Федерацияһы мәктәптәренең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, филология фәндәре кандидаты Рим Сәйетбаттал улы Искәндәров ғүмер баҡый ауыл ерендә йәшәй һәм хеҙмәтен балаларға белем биреүгә, уларҙы тәрбиәләүгә бағышлай. Тыуған ер, кендек ҡаны тамған төйәк уның өсөн оло мәғәнәгә эйә була. «Атайым үҙен тәбиғәттең бер өлөшө тип ҡабул итте: малтыуарға рәхимле ине, урманға утынға барһа – артыҡ ағас киҫмәне, муйыл-балан йыйһа – ҡыуағын тунаманы, һунарға сыҡһа – кейектәрҙе аяны, атманы, уларҙы күҙәтеп кенә ҡайтыр ине», – тип хәтерләй әңгәмәсем яҡын кешеһе тураһында.

Айрат Рим улының мәктәп йылдарында, Башҡорт дәүләт университетында уҡыған ваҡытта походтарға, экспедицияларға йөрөүе, тыуған төйәгебеҙҙең элек





**Нәркәс Абҙан шарлауығында**

билдәле булмаған серҙәрен асырға тырышыуы, яңы офоҡтарға ынтылыуы ла шул балалыҡ осоронан килә. Күңелендә кесе ватанға һөйөү тойғоһон, илдәр гиҙергә ынтылыу теләген географиянан белем биргән Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Өфө ҡалаһының почетлы гражданы Зөмәрә Вәли ҡыҙы Хисмәтуллина тағы ла ныҒыраҡ үҫтерә. «Уның дәрестәре география фәнен уҡытыуға ғына ҡайтып ҡалмай, ә мауыҡтырғыс сәйәхәткә, тормош һабаҡтарына әйләнә ине», –

тип йылы тойғолар һәм оло хөрмәт менән иҫкә ала ул остазын.

Бала саҡ, йәшлек хыялдары, башлы-күҙле булғас, ғәҙәттә, икенсе планға күсә, йәйләп онотола йәки билдәһеҙ ваҡытҡа кисектерелә. Айрат Рим улы мәшәҡәттәргә бай ғаилә тормошонда ла мауығыуҙарын һаҡлай алған, хәләл ефете Зифа Зыя ҡыҙы менән, һәр форсаттан файҙаланып, Башҡортостаныбыҙ буйлап сәйәхәт ҡылалар, халҡыбыҙҙың мәшһүр эпостарында, легенда-риүәйәттәрендә һүрәтләнгән урындарҙы йөрөп күреп сыҡҡандар. Улдары Асҡар менән ҡыҙҙары Нәркәскә лә ата-әсәнән тәбиғәткә һөйөү күскән. Каникул һайын ғаилә республикабыҙҙың



Һәүәләй ауылы янында

төрлө тарафтарына сәйәхәт ҡылырға ғәҙәтләнгән. Балалары Силәбе, Ҡазан, Мәскәү, Санкт-Петербург һәм башҡа ҡалаларҙы барып күргән. Нәркәс Швецияла һәм Финляндияла булған. Айрат Рим улына ла, Зифа Зыя ҡыҙына ла АҠШ менән яҡындан танышырға насип итә.

Әйткәндәй, Асҡар әле медицина университетын тамамларға йыйына, ә һеңлеһе Рәми Ғарипов исемендәге 1-се республика гимназия-интернатының 10-сы класында уҡый. Нәркәс шулай уҡ ҡул эштәре менән мауыға. Бәйләү, тегеү серҙәрен интернет селтәрҙәре аша ғына өйрәнмәй, махсус журналдар ҙа алдыра. Әле үк оҫта ҡыҙ яҡындарын

## Белешмә:

Айрат Рим улы Искәндәров оҙаҡ йылдар дәүләт һәм урындағы үҙидара органдарында хеҙмәт итә. Бөгөнгө көндә йәмәғәтселек менән бәйләнештәр белгесе булараҡ, ошо юҫыҡта эштәр башҡара. 2022 йылда «Рәсәй лидеры. Көслө ил» милли премияһының «Беҙҙең дәүер геройы» номинацияһында дипломға лайыҡ булған.

Зифа Зыя ҡыҙы 1995 йылдан Рәми Ғарипов исемендәге 1-се республика гимназия-интернатында балаларға рус теле һәм әҙәбиәте, донъя мәҙәниәте дәрестәрен уҡыта. Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Рәсәй Федерацияһы хөкүмәтенең мәғариф өлкәһендәге грантына лайыҡ булған.

күҙҙең яуын алып торған әйберҙәр менән ҡыуандыра.

– Республикабыҙҙа аяғым баҫмаған урын һирәк, әммә серен асмаған ерҙәр ҙә бихисап әле. Белорет, Әбйәлил, Баймаҡ тарафтары күңелгә хуш килә. Һуңғы осорҙа Мораҙым тарлауығында булдыҡ. Ундағы тәбиғәт иҫте китерерлек. Ирәмәлгә артылдыҡ, Айғыр ҡаяһына мендек, Асҡын боҙ мәмерйәһенең ғәжәйеп ер аҫты донъяһын күрҙек, Киндерле мәмерйәһенә күтәрелдек, Еҙем тәбиғәт ҡурсаулығы күңелдәрҙә арбаны. Ике йыл элек Бәләбәй, Бишбүләк яҡтарында ял итергә тура килгәйне, уларҙың, ысынлап та, шишмәләр төйәге булыуына инандым. Ғөмүмән алғанда, Башҡортостаныбыҙ тәбиғәте ғәжәйеп матур, мөғжизә эҙләп, әллә ҡайҙа ситкә сығып йөрөйһө лә түгел, – тип һығымталай тыуған яғыбыҙҙың, еребеҙҙең хозурлығына мөкиббән Айрат Рим улы.

«Ҡайҙалыр ашҡынабыҙ, ә ҡайһы саҡ үҙ төйәгебеҙ тураһында төптән белеп етмәйбеҙ. Шуға ла һуңғы осорҙа тыуған яғымдың күптәргә билдәле булмаған үҙенсәлектәрен кешеләргә күрһәтергә тырышам», – ти Айрат Рим улы һәм Үтәгән ауылының данлыҡлы үткәне, кешеләре, арҙаҡлы шәхестәре тураһында һөйләп китә.

Ауылға Дыуан-Табын волосы старшинаһы Мыуаш Үтәгәнов нигеҙ һалған. Ул Пугачев яуында ҡатнаша. Үтәгән старшинаның 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыуы тураһында легендалар һаҡланған.

Башҡортостанда ҡатын-ҡыҙҙар араһында тәүгеләрҙән булып Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен алған данлыҡлы сөгөлдөрсө Банат Батырова – Үтәгән ауылы килене. Билдәле академик, тел һәм әҙәбиәт ғалимы Ғайса Хөсәйенов, ғалим һәм әҙәбиәтсе Роберт Байымов, Башҡортостандың халыҡ артисы Әхәт Хөсәйенов Үтәгәндә тыуып үҫкәндәр.

Үтәгән ауылында бөгөнгө көндә 145 йорт һанала. Мәктәп эшләй, 2016 йылда мәсет төҙөлгән. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙың исемен мәңгеләштергән һәйкәл яңыртылған. 2022 йылдың аҙағында яңы фельдшер-акушерлыҡ пункты үҙ ишектәрен асҡан.

Ә бөгөн үтәгәндәр ниндәй уй-хыялдар менән йәшәй, уларҙы нимәләр борсой, киләсәккә ниндәй өмөттәр бағлайҙар? Айрат Рим улын ошо һорауҙар уйландырмай ҡалмай, әлбиттә. Тыуған ауылын Башҡортостанда киң танытыу, уға иғтибар йәлеп итеү, ситкә сығып киткән яҡташтарын ата-бабалар төйәгенә ылыҡтырыу уйын ул күңелендә ике-өс йыл йөрөтә. Уйланыуҙары Ҡабаҡ байрамы (ҠабаҡФест) үткәреү идеяһына алып килә. Сара былтыр сентябрь айында республика кимәлендә шаулап уҙа. «Ҡабаҡ байрамын башҡа урындарҙа ла үткәрәләр, әҙерлек барышында уларҙың нисек ойошторолоуы менән ҡыҙыҡһындыҡ. «Үтәгән ҡабағы» фестиваленең беҙҙең ауылға ғына хас үҙенсәлеген таба алдыҡ, тип уйлайым. Ул йолаға инер һәм туристарҙы, сит яҡтан ҡунаҡтарҙы йәлеп итер үҙенсәлекле брендка әүерелер, тип ышанам», – ти әңгәмәсем.

Зифа Зыя ҡыҙы менән Айрат Рим улы Искәндәровтар үҙҙәренең өлгөһөндә итәғәтле балалар үҫтергән. Тормошта уларға дөрөҫ юл күрһәтә, мауығыуҙар аша ватансылыҡ, Башҡортостаныбыҙға, уның иҫ киткес матур тәбиғәтенә һөйөү тойғоһо тәрбиәләй алған. Бөгөн ғаилә әленән-әле яңы ерҙәр күреү, киң офоҡтарҙы иңләү хыялы менән йәшәй.

**Рәсүл БАЙГИЛДИН.**



podpiska.pochta.ru



Розалиә СОЛТАНГӘРӘЕВА,
филология фәндәре докторы

# ЮЛДАН ЯҘҘЫРМАҪ ХАЛЫҠ ӘҘӘБЕ

## Ҡушаған менән ҡуша ҡартай

«Ҡушаған менән ҡуша ҡартай. Ҡуш аяҡлап төш, килен!» — тиҙәр.

Мең, ғәйнә, ҡыпсаҡ ырыуы башҡорттары килен ҡаршылағанда мендәр һала. Шул мендәрҙе икеһенең арҡаһына терәтеп, еңгә кеше йәштәрҙе эске өйгә индерә.

Ҡәйнә буласаҡ килене менән күрешә, уның маңлайына аш һөртөп, ауыҙына май, бал яға, кәсә менән «аҡ» (эсемлек): ҡымыҙ, һөт, ҡатыҡ бирә. Килен ауыҙ итеп, һауытты ҡәйнәһенә ҡайтара. Тик өйгә инмәй. Ошо ваҡыт: «Килен ишеккә һыймай тора, ин кәрәк, ин!» — тип ҡысҡыралар. Ҡәйнә: «Ингә — бер һарыҡ!» йә «Ингә — бер башмаҡ, ин, килен, ин!» — тип мал әйтә. Ҡайһы ваҡыт, шаярып: «Йыуғыс менән ҡырғыс!» — ти. Килен өйгә инә, тик түпһә аша атлағанда тағы туҡтай, өҫтәп мал әйтәләр.

Киленде ике малай ишектән үткәрмәй тора. Килен уларға ҡулъяулыҡ бирә. Уң аяҡ тубығына тубыҡланып, һул аяҡты алға тубыҡҡа ҡуйып, килен егеттең ата-әсәһенә сәләм бирә, тәжем ҡылып, баш эйә. Өлкәндәрҙе, ата-әсәне ололау билдәһе был. Өйгә ингәс, сөйгә таҫтамал элә, маңлайын өс мәртәбә мейескә тейҙереп ала.

Ишектән инеү менән, егеттең әсәһе тағы һыйыр йә тана, һарыҡ, бәрән әйтеп, килененең арҡаһынан һөйөп һамаҡлай:

*Түллей, түллей түлле бул,*
*Буҙәнәләй түлле бул.*
*Уллы бул, ҡыҙлы бул!*
*Иреңде хөрмәтлә,*
*Мыжып йөҙәтмә!*
*Бер ҡулың балда булһын,*
*Бер ҡулың майҙа булһын.*
*Көлдөксәң тулы көл булһын,*
*Ҡаҙаның тулы аш булһын!*

Йәш килендең аяғы аҫтына тамғалы кейеҙ йәйәләр. Егет менән улар бергә баҫырға тейеш. Кейеҙгә көс, ҡеүәт, түл, ныҡлыҡ билдәһен сағылдырған тамғалар һуғылған: ҡушҡар, кәрес, йондоҙ, оя, кәрәҙ... Килен өйгә инеү менән урынына ултырмай. Морондоҡ инәй уны күреп: «Урындыҡ, киленгә урындыҡ кәрәк!» — ти. Ҡәйнә тағы бер баш ваҡ мал әйткәс, килен түргә уҙа. Ҡарттарға ҡыҙҙың еңгәһе таҫтамал тарата. Был — «күренеш бүләге».

Йыйылған йәштәрҙең өҫтөнә кейәү яулыҡҡа төйнәлгән сәк-сәк ырғыта. Уны кем дә булһа бераү тотоп алып, сәк-сәкте башҡаларҙың өҫтөнә һибә, малайҙарға өләшә. Яулығы иһә шул сәк-сәк өләшеүсегә «килен бүләге» була.

Килен ауыл бала-сағаларына төҫлә еп, суҡ тарата. Балалар ауыл буйлап ошо суҡтарҙы болғай-болғай йүгерә.

## Һыу башлатыу

Килендең морондоҡ әсәһе йә ауылдың оло инәһе, һыу күнәктәрен үҙе көйәнтәләп алып, алдан төшә, ә йәш килен әхирәттәре менән уға эйәрә. Арттарынан килен күрергә йыйналған йәш-елкенсәк, ҡыҙ-ҡырҡын, бала-саға төшә. Морондоҡ әсә бүләк итеп ҡыҙҙарға күкрәксә тарата, ә килен йөҙөк, таҫма өләшә, малайҙарға янсыҡ бирә.

Һыуға барғанда, килен ауыҙына тәңкә ҡаба. Өнһөҙ генә атлай. Барып еткәс, шул тәңкәне һыуға ташлай. Морондоҡ әсә ошо ваҡыт: «Киленде тотма, тәңкәне тот!» — тип ырымлай. Йә килен үҙе: «Мине тотма, тәңкәне тот! Хәләл өлөшөмдө биреп тор!» — ти. Һыу алыр алдынан йәш килен бит-ҡулдарын йыуа, теләк әйтә. Йәш килендең яурынына тулы күнәкле көйәнтәләрҙе морондоҡ әсә йә бикәсе һала ла кире ала — шулай өс тапҡыр ҡабатлай. Килен һыуҙы сайпылдырмай, тигеҙ генә баҫып атлап ҡайтырға тейеш. Шуның менән уның уңғанлығы һынала.

---

*Дауамы. Башы 10-сы, 11-се (2022 йыл), 1-се, 2-се һандарҙа.*

podpiska.pochta.ru

## Килен сәйе

Ҡәйнә килен алып килгән һыуҙан сәй ҡайната, ҡунаҡ йыя. Йоланы «килен сәйе» йә «килен һөйөү» тиҙәр. Киленгә алғыш әйтәләр:

*Иреңде хөрмәтлә,*
*Ҡәйнәңә хеҙмәт ит,*
*Ҡотло килен бул!*
*Еңел аяҡлы бул!*
*Иреңдән алда тушәккә*
*Барып ятма, киленсәк.*
*Ауыл буйлап остаңлап,*
*Хәбәр һатма, киленсәк!*

Сәйгә килгән ҡатындар килендең һәр аҙымын, эш ибен, ҡунаҡтарҙы хөрмәтләүен ҡарап һынап, өс-башына, кейеменә, билдауына тиклем тикшереп ултыра. Бушаған мәлдә килен, һөйәлеп, ҡәйнештәре менән һөйләшеп торһа: «Был килен ус ялатмаҫ, ауыҙы-башы останлап, күп һөйләй, үҙе ялҡау булыр — һөйәлеп тора», — тип ғәйепләргә әҙерҙәр.

Килен әбей, еңгәләргә — түшелдерек, бабайҙарға таҫтамал тарата. Сәй һыйы үткәс, килендә ауыл буйлап йөрөтөп күрһәтәләр.

Килен юлына һеперткене йә көйәнтәне арҡыры һалыр булғандар: һөйәп ҡуйһа — уйлы, аша үтһә — аңһыҙ, мәғәнәһеҙ булыр.

Халыҡ алдына сыҡҡас, ҡәйнеше еңгәһе тирәләй, уҡлау тотоп, өс тапҡыр әйләнә: был — ырыуға ағзалыҡты раҫлаусы сара.

## Килен күреү

Ҡоҙалар ҡайтҡандан һуң бер нисә көн үткәс, егеттең еңгәләре аш-һыу әҙерләй, тағы «килен сәйе» йыя. Был ҡорҙо тик еңгәләр генә үткәрә. Йәш киленгә изге теләктәр әйтелә. Ошо көндән яңы килен йорт мәшәҡәттәре менән таныша. Өҫтөнә кәзәки йә елән кейә. Йола, әҙәп буйынса, ул ялан күлдәк, яулыҡһыҙ, билен быумай, балтырын йәшермәй йөрөргә тейеш түгел. Шулай уҡ уға ҡәйнеш булмаған ир кеше менән һөйләшергә йә уның алдынан үтергә, һүҙ көрәштерергә ярамай.

Әгәр килен икенсе (өсөнсө) ҡатынлыҡҡа алынһа, уның көндәше ире менән бергә була торған бер нисә сират көнөн йәш киленгә биреүен әйтә. Ул көндәште үҙ теләге менән алдырыуын, ҡыҙҙы үҙе һайлауын халыҡҡа белдерә. Йәш килен менән көндәш ҡатын бер-береһенә йыр, һамаҡ әйтешеп тә аңлашҡан.

Килен менән ҡәйнә бүләк бирешкәс кенә бер-береһе менән һөйләшә алған. Килен «ҡәйнәм» тип, ҡәйнә «килен» тип мөрәжәғәт итеү хоҡуғына эйә була.

Килен тәүләп ҡунаҡҡа барғанда, һәр өйгә бүләк ала: таҫтамал, сүс-ығырмау тарата, ә уға бал, май ҡаптыралар йә һыу эсерәләр. Сәй эскән йортта килен, ғаиләләге кесе ҡыҙға тип, сынаяҡ аҫтына тәңкә, мәрйен ҡалдыра.

Әбейҙәргә — еп, ҡыҙҙарға йыуаса таратыла. Килендең яурынына тәңкә баҫып, тағы теләк әйтәләр, тормош тәртибенә өйрәтәләр.

Киленде еңгәләре берәр аҙна өйҙән-өйгә ҡунаҡ итеп йөрөтә. Шулай «килен күреү» йолаһы үтәлә. Тик бер йылдан һуң ғына ҡыҙ атай йортона ҡайта ала.

## Һандыҡ асыу

Теләктәр әйтелгәс, килен һандығын сығаралар, һандыҡты егет яғынан иң яҡын апаһы бүләк әйтеп аса. Һәр ҡунаҡ бүләкте һатып ала.

Ирҙәргә — таҫтамал, ҡатын-ҡыҙҙарға яулыҡ, алҡа, беләҙектәр таратыла. Ошо көндө үк килен бирнәһен ҡарау үткәрелә. Йәш ҡатындың ҡул эшен, сигеү, һуғыу, ҡайыу оҫталығын һынағандар.

Килен күрергә килгән бала-сағаға, йәштәргә бейем (егеттең әсәһе) бүләк тарата: малайҙарға — ҡулъяулыҡ, ҡыҙҙарға — еҫле май, һабын, тараҡ, көҙгө. Иң яҡын ҡәйнешенә килен ынйы-мәрйендән ҡайылған ҡулъяулыҡ бүләк итә.

Егеттең еңгәһе ҡушмендәр бүләк итә: «Түшәгегеҙ ҡотло булһын! Икәү ятығыҙ, өсәү тороғоҙ! Татыу йәшәгеҙ! Юғиһә, мендәр бирмәйем!» — ти. Был еңгә бәхетле, күп балалы, ире менән татыу йәшәгән ҡатын булырға тейеш.

## Игәт туйы

Атай йортона ҡайтҡан көндө «игәт туйы» үткәрелә. Ҡыҙға атаһы мал бүләге әйтә. Оло инәйҙәр, сәсән телле апайҙар ҡунаҡҡа саҡырыла, улар, йәштәргә изге теләк әйтеп, фатиха яңырта.

Кейәүҙән ҡыҙ атаһы һорай:

— Ҡыҙымдан ризаһыңмы?

— Риза! — тип яуаплай кейәү.

Өс тапҡыр «риза» һүҙен алғас, атаһы ҡыҙға оло бүләк тәғәйенләй. Муйынына ҡыҙыл сүс бәйләнгән һарыҡ, тана йәки ҡолонло бейә була ул. Аҡһаҡал, ҡыҙҙың оло ағаһы бата әйтә.

Бер йыл йәшәгәс кенә ата йортона ҡайтыу «түркенләү» тип аталған. Шуға ла «Яҡшы ҡатын — киленсәк, яман ҡатын — түркенсәк» тигән әйтем бар.

Артабан фатиха нығытылып, йәштәр яңы тын, көс, хис туплап йәшәп китә. Игәт туйы — ике яҡтың татыулығын нығытҡан мөһим йола. Йыл әсендә төрлө хәл була, кешегә яңы ғаилә тәртибенә өйрәнеп китеүе ауыр. Ә был йола мөнәсәбәттәрҙе йылай, нығыта...

podpiska.pochta.ru

Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА



*Таңһылыу Ҡарамышева шиғырҙары иҫ киткес һәләткә эйә: күңел сөңгөлдәренең аҫтын-өҫкә әйләндереп, йөрәктәрҙе кәрәҙ балылай хуш еҫле һуты, таты, ҡото менән һуғарып, сафландыра, бейегәйтә, бөйөгәйтә. Һәр шиғри һүҙе, ғәжәйеп йәнле сағыштырыуҙары телебеҙҙең ни тиклем бай биҙәкле булыуын раҫлаһа, фәлсәфәүи мәғәнәһе уны аң-уй кимәлен юғарылыҡҡа күтәрә, асмандарға әйҙәй.*
*Тел, рух, милләт һаҡсыһы булған хөрмәтле әҙибәбеҙҙе 75 йәшлек юбилейы менән ҡотлап, ныҡлы һаулыҡ, оҙон ғүмер һәм дә шиғри моң һандығының һәр саҡ тулы булыуын, гәүһәр һүҙ хазинаһының тағы ла сағыуыраҡ балҡыуын теләйбеҙ!*

# «Сарсағанға һыуһын була алмай Тереһыуһыҙ ҡалған буш ҡоҙоҡ...»

## Сылбыр

Әҙәм шытҡан — тәүге бәндә,
Кешелектең орлого.
Һаман тоташ, өҙөлмәгән
Быуындарҙың сылбыры.
Мин донъяға тыуһын өсөн
Кәрәк булған бер әҙәм:
Тәүге әҙәм — тәү пәйғәмбәр,
Яҙамын һиңә ғәзәл!
Мин донъяға тыуһын өсөн
Кәрәккән атам-әсәм,
Олатайым, өләсәйем,
Мең ҡартатам, мең ҡәрсәм.
Рәхмәтлемен мин уларға,
Тамырыма — ҡаныма:
Мин тыуғанса ерҙә булған
Ырыуым урманына.
Киләсәк үә тарих һаҡсым,
Ғәзәлдәрем — күҙ нурым,
Маңлайҙағы хаҡ яҙмышым —
Өҙөлмәҫ иҫ сылбырым.

## Ҡатын-ҡыҙ

Һуғарғысы, йәшәү сығанағы,
Йәншишмәһе ирҙең — ҡатын-ҡыҙ.
Ҡабат-ҡабат урап килә торған,
Ғәйрәт биреп торған аҫыл ҡуш.
Сарсағанға һыуһын була алмай
Тереһыуһыҙ ҡалған буш ҡоҙоҡ.
Ҡатын-ҡыҙ ул һөйөү ағымының
Тулылығы менән тик ҡыҙыҡ.
Һәр саҡта ла көслө була алыу —
Ҡатын-ҡыҙҙың иң төп ғәмәле,
Бағланышы, ерҙә йәшәгәндә
Әйҙәп йөрөтөүсе әләме.
Ир ҡатынға тотош донъя түгел,
Ә бары тик сатҡы, осҡоно.
Ошо осҡон, ошо сатҡы өсөн
Бар ирҙәргә йүг(е)реп ҡайтыр ер.
Тулҡындары ғәййәр ҡатындарға
Йәнен бирергә лә әҙер ир.

## Ҡот

Мин — ҡатын-ҡыҙ, йорттоң ҡото,
Янып торған усағы,
Етәге үә итәгеләр,
Ундырышлы тупрағы.
Мин — ҡатын-ҡыҙ, йорт йөрәге,
Һиҙгер, нескә тойғоһо,
Бәйелде үҙ урынына
Ултыртыр урындығы.
Мин — ҡатын-ҡыҙ, өй тиррәге,
Тотҡаһын тотҡан усы,
Алтын аҡыл еңеренә
Ҡаҡшамаҫ ышаныcы.
Мин — ҡатын-ҡыҙ, йорт сырағы,
Һүрелмәҫ намыҫылыр,
Ер бишеген бәүелтеүсе
Байымаҫ ҡояшылыр.

## Риүәйәт

Йөҙөм — әҙәм баҡсаһында
Йәшәгән башлы йылан:
Һөйләшкән аҡыл телендә,
Булмаған бер ҙә тиран.
Кәңәш иткән, ышандырған
Әҙәменең Һауаһын:
Тәмлә, тиеп, киҫеп әйткән
Тыйылған аң алмаһын!
Үҙ үлеме менән һәр кем
Хаҡлы тигән үлеүгә —
Таян, тигән, һин, гүзәл зат,
Көскә түгел, һөйөүгә!
Еңеп сыҡҡан ошо ҡөҙрәт:
Ҡатындың ҡатынлығы!
Урынлашҡан йөҙөмлөктә
Алиһә хакимлығы.
Бер ҡасан да был оҗмахта
Булмаған, ти, һуғыштар,
Тыйылынған сик боҙоуҙар,
Баш ҡыйыусы ҡылыстар.
Тик йәннәттән бер көн килеп
Ҡыуғандар, ти, Әҙәмде.
Яһилланған кешелектән
Таҙартҡандар ғаләмде.
Кәмһетелгән, хоҡуғынан
Яҙҙырылған ҡатындар...
Мөхәббәткә таянмаған
Донъя яҙған аҡылдан.



podpiska.pochta.ru

## Бишек йыры

Ҡарын бишегенән күсә
Сөйҙәге сәңгелдәккә,
Үҫә-үҫә бала-саға
Атыла әүһелдәктә.
Шунан уларҙы бәүелтә
Йәшәйештең бишеге.
Ғүмере бар һәр кемде лә
Көтә сәңгелдәк көйө.
Мин дә көйләнем бит уны
Бәпесем тыуған йылды:
Кешелек таңы атҡандан
Башланған бөйөк йырҙы.
Йөрәк тибеше шикелле
Бишектең тирбәлеше,
Тыныс аҡкан тәрән йылға
Һалмаҡлығы рәүеше.
Әсә йырлай... Юҡ бер төрлө
Хәүеф-хәтәр сабыйға.
Татлы сырымына китә
Имен-һау, көйлө донъя.
Ҡояш күҙен йомоп тыңлай,
Ай-йондоҙҙар йәнләнә.
Әйтерһең дә, ошо көйгә
Ер күсәре әйләнә.
Кешелектең ғүмер йыры
Ләззәт хисен юймайҙыр:
Ҡарындағы тере йәндәй,
Ауырлығын тоймайҙыр...

## Тыңланым мин тынлыҡты

Тыңланым мин тынлыҡты.
Елдәр иҫте шипкертеп.
Тыуасаҡ сабыйымдың
Бишек йырын ишеттем.
Йырланым мин был йырҙы
Туғайҙа үҫкән гөлгә,
Донъяға тыуыр йәндең
Атаһы булыр иргә.
Йөгөм көйөн көйләнем
Кендек инәләренә,
Тәнәйҙе һаҡлаясаҡ
Өйөм эйәләренә.
Сабый тыуғас, бишекте
Тирәләп йыр йырланыҡ:
Шипкерт елдән ишеткән
Үҙ моңон ололаныҡ.
Тыңланым мин тынлыҡты...
Елдәрҙән килде хәбәр:
Үҙ йырың тик оҙатыр
Һуңғы юлыңа ҡәҙәр!

## Түңәрәк өҫтәл

Ишле булды атам ғаиләһе,
Өҫтәлебеҙ булды түңәрәк.
Табын артындағы ултырған ер
Түрһеҙ булды, ҡотло, мөбәрәк.
Түре булманы был түңәрәктең,
Ишек яғындағы мөйөшө.
Түрбаш булды беҙҙең һәммәбеҙҙең
Өлөшөнә төшкән көмөшө.
Шаярыштыҡ, ыҙғышып та киттек,
Ҡыуылманы бер кем тупһаға.
Һәр бер мәсьәләне бергә систек,
Кәңәшләштек, һалып уртаға.
Әйтер ине әсәй, бармаҡ янап:
Түр ҡәҙерен йүнһеҙ белмәгән!
Киҫәтеп бит әйткән йәнә халҡым:
Түрекмәгән түрен бирмәгән!
Бала саҡтан яң(ғы)рай күңелемдең
Яҡшы теләк, изге алғышы:
Түңәрәккәй өҫтәл арттарында
Хәл ителһен донъя яҙмышы!

## Ир үә ҡатын

Ир күҙ булһа, ҡатын — керпек,
Дәрәжәгә мәртәбә:
Тигеҙ ғүмер итер ирҙе
Тота белә кәртәлә.
Ир — келәт ул, ҡатын — йоҙаҡ,
Асҡысы уның — аҡыл.
Балҡытып тота торлағын:
Ирҙең ҡояшы — ҡатын!
Ир — иләймән, ил имәне,
Ҡатындар — унда ҡайын.
Ҡайындарҙы яратмайҙыр
Хыянат һөйгән хаин.
Ир — ғәййәр ҡош, осҡанында
Ыласынға тиң булғас.
Ҡыйғырлыҡҡа мәҙих арнай
Ҡатын — йырсы һандуғас.
Әлдә булған ике ҡанат:
Йәнбирҙекәй, Йәнбикәү,
Кешелеккә ғүмер биргән
Әҙәм, Һауа — тәү икәү!
Ир ут булһа, ҡатын — һыуҙыр,
Ике ярты — бер ҡушаҡ.
Улар ҡушаҡ булған өсөн
Һыу аға, яна усаҡ.
Тотоп тора ғаиләне
Еңел булмаған хеҙмәт:
Йөрәктәге иң изге хис —
Ҡатынға булған хөрмәт!
Ир баш булһа, ҡатын — муйын,
Башты тотоп торалыр,
Ҡыйыҡ итеп йәшәү көсөн
Донъя йәнен ҡоралыр.

## Һомай

Ҡоштар батшаһы ҡыҙы,
Асмандың яҡты ҡыҙы,
Үҙе ҡош үә үҙе ҡыҙ,
Әлеңге үә боронғо!
Атаһы уның Самрау,
Әсәһе уның Ҡояш,
Алтын уның тарағы,
Сәстәре ҡыҙыл ҡомас.
Донъяға ул килгәндә
Үлемһеҙ булып тыуған:
Йәншишмә һыуы менән
Инәһе тәнен йыуған.
Ер ҡошонан түгел ул:
Нур менән тамаҡлана,
Ә өҫтиһә, күктәрҙә
Яҡтылыҡ ҡанат ҡаға.
Ҡош күлдәген систиһә,
Ер ҡыҙына әйләнә,
Йәне һөйгән йәр менән
Сәсе сәскә бәйләнә.
Урал батыр ҡатыны,
Әсәһе ул улдарҙың,
Ер йөҙөнә ҡош түгел,
Кеше булып тыуғандың.
Тереһыуға юл асҡан
Уралға Һомайыбыҙ,
Үлемһеҙ булһын, тиеп
Урмандар, туғайыбыҙ.
Иреңенән үпкән ул,
Батыр ерҙән киткәндә,
Аҡҡош булып осҡан ул,
Ҡыҙ күлдәген сискәндә.
Башыбыҙҙың осонда
Ҡанатлы нур кәйелгән:
Йәнебеҙ бишегендә
Ҡояш ҡыҙы бәүелгән.

podpiska.pochta.ru



Рауил ШӘЙХЕЛИСЛАМОВ һүрәте.

podpiska.pochta.ru

# ӘСӘ ЙӨРӘГЕ – ӘҮЛИӘ

Хикәйә

*Раббының ҡөҙрәте икһеҙ-сикһеҙ,*
*йөрөткән юлдарына зиһен етмәҫлек.*
*Зәбүрҙән.*

Башындағы тойғолар ҡойононан, ҡапма-ҡаршылыҡлы уйҙарынан үҙенең аҡылдан шашыуҙың сигенә етеп барғанын һиҙҙе Мәликә. Нисәмә йылдар буйы күңеленең иң төпкөлөнә, хатта үҙенән дә йәшерергә маташып баҫырып ҡуйған шик-шөбһәләр, үлемесле тыйыу менән мисәтләнгән теләк, бер нәмәгә ҡарамай баҙлаған ныҡыш өмөт, хыянатсыл хыял — барыһы ла бер юлы ҡутарылып ҡалҡып сыҡҡайны. Улар әле булмышын тотош биләп алып барған тыйғыһыҙ бер рәхәтлек, йәнде иретер ләззәт менән алыша ине.

«Ул бит, ул!» — тигән тантана алҡымына килеп тығыла ла...

Шул саҡ алда ултырып килгән хеҙмәттәше артҡа боролоп:

— Нишләйбеҙ, ҡыҙҙар? — тип өндәште. — Беҙ, ғәҙәттәгесә, түрәгә барып күренәбеҙ, ә һин, Мәликә, сәйеңде ҡайната тораһыңмы?

Мәликә янында йоҡомһорап килгән икенсе ҡатын һиҫкәнеп күҙен асты.

— Ҡайтып та еттекме? — тип яҡ-яғына ҡаранды. Юл буйы йоҡлағанға һалышып, ә үҙе машинанан ырғып төшөп кире йүгерерҙәй булып йөрәкһенеп килгән Мәликә, тонсоғоп барған кеше һымаҡ, ҡомһоҙланып тын алды ла:

— Ғәфү итегеҙ, ҡыҙҙар, башым ярылып бара, дарыу эсеп ятып ҡарайыммы икән әллә, тип киләм, — тине.

Уның ағарынған йөҙөнә, көсөргәнештән ҡымтылған ирендәренә ҡарап, әхирәттәре борсолоп китте.

— Әллә тура табипҡа бараһығыҙмы, Мәликә Хәлиловна? — тип һүҙгә ҡушылды уның машинаға ултырғанда уҡ төҫө ҡасҡанына иғтибар итеп, юлда күҙгә аша күҙ һала-һала килгән өлкән йәштәге водитель.

— Дарыу эсеп ятып торһам, үтер ул, — тине ҡатын өйө тәңгәлендә шәберәк төшөп ҡалырға ашығып. Уның тиҙерәк яңғыҙ ҡалғыһы, көтмәгәндә-уйламағанда барып тапҡан бәхете тураһында аулаҡта ғына уйлағыһы килә ине. Машинанан төшкәс, үҙен тыныс тоторға тырышып атлай бирҙе лә, ҡапыл йәһәтләне, тигеҙ ерҙә абынып һөрләкте, һаман ҡуҙғалып китмәйенсә сәйерһенеп ҡарап ҡалған хеҙмәттәштәренә

## Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА



*Гөлсирә Ғиззәтуллина — китап һөйөүселәр иң яратып уҡыған талантлы ижадсыларҙың береһе. Яҙыусының күңел байлығын, һүҙ маһирлығын, йыһандай тәрән, тормошсан фәлсәфәүи уй-фекерҙәрен сағылдырған әҫәрҙәре тотош хазинаға тиң. Донъяның асылын нескә тойған, аңлаған авторҙың геройҙары ла ғәжәйеп йәнле, сағыу һәм яҡты. «Башҡортостан ҡыҙы» журналына махсус яҙған өр-яңы «Әсә йөрәге — әүлиә» хикәйәһендә лә ул асыҡ сағыла. Мауыҡтырғыс та, тетрәндергес тә яҙмыш боролоштарын һүрәтләгән әҫәр һеҙҙең күңелегеҙгә лә хуш килер.*

боролоп йылмайған булды. Ихатаға инеү менән ҡабаланып күтәрмәгә менде, асҡысын йоҙаҡ тишегенә тура килтерә алмай йонсоно. Ингәндән һуң ишеккә һөйәлеп йәнә тәрән итеп тын алды. Бер туя һулыш алғас, үҙ-үҙен байҡаны: эсе тулы бәхет ине. Йөрәге шартлар кимәлдә, яурындарҙы баҫып алып барған бәхет. Быуаға тулғандан тула барған ташҡын һымаҡ ине уның был тойғоһо: тыйғыһыҙ, ҡырағай, хатта аяуһыҙ — бына-бына ул бөтә ҡаршылыҡтарҙы аҡтарып ташлап, юлындағы бар нәмәне йыуып ырғытып, иң яҡын, иң ҡәҙерле кешеләренең дә йән тыныслығын юҡҡа сығарырға һәләтле бәхет. Аҡылы менән быны аңлай ине Мәликә.

Тиреһенә сыҙаша алмайынса, башын аймап тотҡан килеш бүлмәләр буйлап китте. Яратып, һәр бизәген, төҫөн һайлап, күңелен һалып йыһазлаған йортонан ниндәйҙер бер таяныс эҙләүе булдымы был? Тик өйөндә бер йәм ҡалмағайны. Тәне бында ҡайтҡан да, йәне тегендә ҡалғанғамы... Иң аҙаҡтан ҡыҙының, ғәҙәттәгесә, бола бүлмәһенә — бошоноу тигәнде белмәгән Айзиләһе үҙе әйтмешләй, өңөнә килеп инде. Ундабында аунап ятҡан кейемдәрҙе алып элде, юрғанын һирпеп кенә ташлап, һикереп тороп киткән караватына текләне, балаһының башының эҙе һаҡланған мендәргә ҡапланып, ҡысҡырып илап ебәрҙе. Күңелендәге тойғолар ташҡыны, ниһайәт, йырып сыҡты туғарылып, ғүмерҙә булмағанса, ярһып-ҡысҡырып иланы Мәликә. Гүйә, бына ун ике йыл инде ҡырылмаһа-ҡырҡ йоҙаҡ менән бикле торған зиндан аҡтарылды ла хатта үҙенән дә йәшереп ҡуйған хыялы ирекҡә сыҡты. Хыял түгел ине ул хәҙер, ғәмәл ине. Яҡындарының, айырыуса иренең уны аңларға теләмәйәсәген дә һиҙә Мәликә. Бары үҙенә үҙе генә терәк буласағын самалай. Шунлыҡтан алдан уҡ ярһый ине, ахыры ул. Бала сағынан ҡалған күренеш: яр емерелеп, яҙғы ташҡынға ағып киткән ҡолоно артынан уҡталған ҡыҙыл бейәнең, тыйырға тырышып, йүгәнде ысҡындырмаҫҡа ҡыр талашҡан олатаһын да һөйрәп йылғаға ташланғаны хәтер күгенән ялтлап, тетрәтеп үтте. Малҡайҙың атылып сығырҙай булып аларған күҙҙәре, асырғанып кешнәүе ҡолағында яңғыраны. Үҙен үлемдән аямай боҙло ташҡынға ырғырға мәжбүр иткән ҡырағай көс — Мәликә әле үҙендә лә шуны тойҙо.

«Берегеҙ ҙә, берегеҙ ҙә ышанманығыҙ миңә! Барығыҙ ҙа ҡаршы булдығыҙ!» — тип ярһып һамаҡланы ул. Күҙ йәштәренә төйөлөп буҫлыҡты: «Ышанманығыҙ!.. Берегеҙ ҙә...»

***

Төпкөл ауылдан яҙылған ялыуҙы тикшерер өсөн килеп төшкән депутатты йыйылышҡа алып китеп барышлай, куртҡаһын алыр өсөн генә өйөнә һуғылған Заһир тәҙрә тәңгәленән үтешләй үк ишеткәйне был сәйер тауышты. «Кем телевизорҙы шул тиклем ҡысҡыртып ҡуйҙы икән?» — тип ғәжәпләнде. Райондың мәғариф бүлегендә методист булып эшләгән ҡатыны ауыл мәктәбенә асыҡ дәрескә тип, иртән иртүк сығып киткәйне. Әле уға ҡайтып етергә иртә. Ҡыҙҙары был ваҡытта мәктәптә булырға тейеш.

Ишек эстән бикләнгәйне. Уны үҙ асҡысы менән асып ингән ыңғайға йөрәге «жыу» итеп китте лә тупһала туҡтап ҡалды. Шунан ҡото осоп ярһып илаған тауыш яғына ташланды: нимә булған? Йәндәй күреп үҫтергән яңғыҙ ҡыҙғыналарына бер-бер хәл булғанмы әллә?

— Мәликә, нимә булды? Нишләп илайһың? — тип ҡатынының дерелдәп торған яурынынан айманы. — Әйтә һал тиҙерәк! — тип ялынды йөрәге ярылырҙай булып.

Илап шешенгән ҡатыны йәшкә мансылған йөҙөн күтәреп, уға туптура ҡараны.

— Мин һине алданым! — тине ул. — Мин бер ваҡытта ла уны уйлауҙан туҡтаманым! — Күрә алмайынса, битенә эҫе һыу һипкән һымаҡ ярһып әйтте. — Мин һине тыңламаным!

Сабыр, тыныс, ағымлы холоҡло, аҡыллы ҡатынының һүҙҙәре зиһененә барып етмәй торҙо башта. Тауышындағы нәфрәт шаңҡытты.

Ул арала ишек төбөнән сағыу тауыш яңғыраны:

— Атай!

— Бала ҡайтты! — тип ҡорт саҡҡандай ҡапыл һикереп тороп, усы менән ашыға-ашыға еүеш битен һыпырған ҡатынына танымаған һымаҡ ҡарап торған ир яуап ҡайтарманы.

— Атай! — Ҡыҙыҡайҙың тауышы эргәлә генә ишетелде. — Ағайҙар ашыҡтыра!

Ул арала урам тәңгәлендәге тәҙрә яғынан ике машинаның да түҙемһеҙләнеп ҡысҡыртҡаны ишетелде.

Заһир бер туҙраған сәсен рәтләгән ҡатынына, бер тәҙрәгә ҡарап тапанды ла, ҡапыл боролоп, ишеккә йүнәлде. Ботинкаһын сисеп маташҡан ҡыҙының башынан һыйпап:

— Әсәйең ауырып киткән. Уны ҡара инде, ҡыҙым, йәме! — тип сығып йүгерҙе.

Ҡыҙарып-бүртенгән әсәһенең үҙ бүлмәһенән сығып килгәнен күреп, кәйефһеҙлегенең сәбәбен үҙенсә самалап, Айзилә шунда уҡ аҡланырға керешә.

— Атай ныҡлап уятмаған да йоҡлап ҡалғанмын. Шуға бер нәмә лә эшләп өлгөрмәнем. Математиканан өйгә эшемде лә тикшермәгән. Өс булһа, мин ғәйепле түгел!

— Аһ, шул атайҙы! — тигән булды Мәликә, ҡыҙының тыңлауһыҙ сәсенән һыйпап. — Ярай, сисен, сәй эсеп алайыҡ.

Илағанғамы, эске көсөргәнеш кәмегән, ярһыуы баҫылып, уйлай алырлыҡ хәлгә килгәйне. Татылдығын сығып хәбәрен һөйләгән ҡыҙының тауышына ҡолаҡ һалып, үҙ уйҙарына бирелгән килеш өҫтәл әҙерләргә керешә.

— Бутҡа ашайһыңмы, йомортҡамы?

«Нишләп хатта дәрес әҙерләгәндә лә шуны ҡысҡыртып ҡуяһың ул?» — тигәнгә: «Икегеҙ ҙә эштә, миңә лә

podpiska.pochta.ru

иптәш кәрәк тә инде», — тип аҡланған ҡыҙы телевизор тоҡандырырға ла өлгөргән. Дивандан тормай ғына:

— Йомортҡа, тик сейле-бешле булһын, — тип яуапланы.

«Кит инде, кеше кешегә шул тиклем дә оҡшамаҫ. Хас минең ҡарт бейем. Ул да шулай ҡап-ҡара шырт сәсле, муйыл һымаҡ ҡара шар күҙле, уймаҡтай сейә ҡыҙыл иренле, терегөмөш кеүек етеҙ, көләкәс, бошмаҫ була торғайны. Яратҡан ризыҡтарына тиклем бер иш. Уға барһаң, иртән дә, төшкөнөн дә, кисен дә йомортҡа була торғайны».

Ҡәйнәһенең мөкиббән китеп ятраҡан ейәнсәренә һөйөп ҡарап: «Талымһыҙ ҙа инде беҙҙең Айзилә», — тип ҡыуанғанын эсенә төшөрҙө. Мәликә көлөмһөрәп ҡуйҙы ла балаһын йәлләүҙән эсе өҙөлөп китте. Хәҙер белә ине әсә ҡыҙының кемгә оҡшағанын. Апаһына төймәләрен элергә лә бирмәйенсә, бер минут тик тора белмәгән йомро башлы ҡарасман малайҙың көләкәс йөҙө күҙ алдына баҫты. Йәнә бер ҡысҡырып көлгөһө, бер ҡысҡырып илағыһы килде.

***

«Кешене яратам тигән булып йән атып йылдар буйы бергә йәшәйһең. Арҡаға арҡа терәшеп, һулышын тойоп йә ҡосағында ойотоп төндәр үткәрәһең. Һәр миңен, тәнендәге һәр бөгөлдө, хатта өҫтәлә барған һәр йыйырсығын ятлап бөткән кеүекһең. Ә күңелендәген, эске донъяһында нимә барлығын бөтөнләй белеп булмай икән». Тәҙрәгә текләһә лә, күҙенә бер нәмә лә күренмәй, уйҙарына сумып барған Заһир үҙенә ҡағылғанға артына боролоп ҡараны. Бығаса артта йоҡомһорап килгән бүлек мөдире өндәшә икән.

— Заһир ҡусты, иртәрәк ҡайтып булһа, был Өфө ҡунаҡтары менән һеҙҙә ултырып алһаҡ, нисек булыр икән? Ашханаға һый-фәлән әҙерләргә ҡушып киттем. Уныһы менән мәшәҡәт һалмабыҙ, — тине.

Икеһе лә бөтмөр, икеһе лә ашһыуға оҫта был ғаиләнең көткән донъялары ла ҡотло, үҙҙәре асыҡ булғанға, килгән ҡунаҡтарҙы уларҙа һыйлау бер ғәҙәт булып бөткәйне.

— Ғәфү итегеҙ инде, — тиергә мәжбүр булған Заһир, ҡатынының шешенеп бөткән йәшле йөҙөн күҙ алдына килтереп, үҙе лә һиҙмәҫтән ауыр көрһөндө. — Асыҡ дәрескә барған еренән Мәликә ауырып ҡайтып йығылды. Әле шуға көйөп киләм.

— Әйтәм ҡобараң осоп килеп сыҡҡайның, — тине етәксе.

Ир-аттың иң ҡото осҡаны нимә? Әлеге шул ҡатынының хыянаты бит инде. «Мин уны уйлауҙан туҡтаманым!» Кем һуң ул? Заһирҙың уйлай-уйлай башы ҡатты. Ҡатмаҫлыҡ та түгел. Мәликә менән улар бер класта уҡыны. Алтынсы кластан алып дуҫлашып йөрөнөләр. Аҡбур менән рәшәткәләргә, ҡапҡаларға: «Мәликә плюс Заһир тигеҙ була мөхәббәт» тип яҙып ирештерә торғайнылар. Педагогия институтында ла төрлө факультетта уҡыһалар ҙа, бер дөйөм ятаҡта йәшәнеләр. Осрашмаған көндәре булманы. Институттан һуң бер йылға армияға алынған Заһир хәрби хеҙмәтте Алкинда үтте, аҙна һайын тиерлек ҡайтып йөрөнө. Силәгенә тура килгән ҡапҡас һымаҡ бер ваҡытта ла бер-береһенән ялҡманылар. Яратышып өйләнештеләр, татыу йәшәнеләр. Хатта туған-тыумаса менән дуҫиштәре: «Кит инде, ара-тирә ҡашығаяҡ та шалтыратып алмағас, күңелһеҙҙер ул!» — тип шаярта торғайны. Икеһе лә тыныс холоҡло, эшкә уңған, күңелгә күңел яғылып торғанда йәшәү нишләп күңелһеҙ булырға тейеш икән инде?!

«Бер кемдең дә тоғо буш түгел», — тиер ине туғыҙ бала табып та, ҡарт көнөндә япа-яңғыҙ ҡалған күрше әбей. Үҙен шулай йыуатҡандырмы, яҙмышының ауырлығы өсөн аҡланғандырмы — йыш ҡабатлай торғайны. Мәликә менән Заһирҙың да тоғо буш түгел ине — оҙаҡ сабыйҙары булманы. Икеһе лә — күмәк балалы ғаиләнән. Заһирҙың әсәһе — Геройәсә. Ҡоҙағыйы ла унан бер балаға ғына ҡалыша. Ҡырмыҫҡа иләүендәгеләй йәшәп өйрәнгәс, шундай тормоштан ләззәт алғас, ҙур татыу ғаилә тураһында хыялланғайнылар. Хәтерендә, туйҙа ниндәйҙер бер уйын уйнаттылар. Шунда, дүрт балағыҙ була, икеһе — ҡыҙ, икеһе — малай, тип күрәҙәлек иткәс, кейәү менән кәләш бер ауыҙҙан «кәмендә алты» тип көлдөргәйне. Үтә ҡомһоҙланып ташлаған булғандар икән. Тәүге ике йылда бик борсолманылар. Дөйөм ятаҡта ғына йәшәгән йәштәр ең һыҙғанып донъя нығытты, эштә лә абруй яулап алыуы еңелдән булманы. Өс йыл да үтеп киткәс, Мәликә Заһирға өндәшмәй генә табипҡа барып тикшерелгән. Дауаланырға кәңәш иткәндәр. Һаҡ ҡына, аяп ҡына булһа ла, бындай диагноз менән балағыҙ булмауы ла ихтимал, тип әйткәндәр. Мәликә был һүҙгә ышанманы. Күңелен дә төшөрмәне, зарланманы, хәленә күнмәне, төңөлмәне... Табиптар ҙа, экстрасенстар ҙа, имләүсе-һылаусылар ҙа ҡалманы, донъяла барыбер ғәҙеллек бар ул, тигән ныҡышмал ышанысын раҫлап, бергә йәшәгәндәренә һигеҙ йыл тигәндә саҡ ауырға ҡалды. Инде генә башҡа ырыҫ ҡунды, тип һөйөнгәндә, табиптар йөрәк сире тапты. «Бала табыу һеҙгә бик хәүефле. Үҙегеҙҙе үлемесле ҡурҡыныс аҫтына ҡуяһығыҙ», — тип ҡурҡыта башланылар. Бер барыуында: «Ирегеҙ менән кәңәшләштегеҙме һуң?» — тип һорағандар ҙа, Мәликә: «Атаһы ныҡ бала йәнле, ни булһа ла етем итмәҫ», — тип яуаплаған. Ә бит Заһирға был һөйләшеү тураһында ләм-мим өндәшмәгәйне. Тулы һыулы тәрән йылға һымаҡ уның холҡо. Әллә тәрән генә түгел, аҫтыртын да булғанмы?!

***

Мәҙәниәт йорто шығырым тулы. Халыҡ ҡыҙған, бер-береһен бүлдереп һөйләйҙәр. Үткән көҙҙән алып ер өсөн талашҡан ике фермер араһындағы дошманлыҡ ауыл халҡын ҡап уртаға бүлгән. Инде Өфөгә барып еткән был янъялға нисек тә сик ҡуйырға кәрәк. Башҡа түрәләр менән бергә сәхнәләге ҡыҙыл бәрхәт ябыулы өҫтәл артында ултырған Заһир һүҙҙең ағышынан ситкә китмәҫкә тырыша. Ана бер ветеран ҡыҙып-ҡыҙып алдаҡсы фермерҙы фашлай:

— Яҙғыһын йыйылышта Заһир ҡустының күҙенә ҡарап, пай еренә бишәр тоҡ бойҙай тараттым, тип алдап торҙо...

Башҡа хәбәре ҡолаҡҡа инмәй, «алдап торҙо» тигәне күңелде сыйып китә.

«Әллә дауаланырға йөрөгәндә берәйһен яратты ла шуны һаман онота алмаймы? Ә бөгөн нимә булған, кемде күргән? Ул урман яғындағы төпкөл ауылда кемде осратыуы мөмкин?» — тип йәнә үҙенең уйына уйыла Заһир. Һорауҙар, һорауҙар... Ә бит яуаптарға уларҙың яҙмыштары бәйләнгән. «Әгәр ҙә осратҡан булһа, миңә нимә эшләргә? Һөймәгәнгә һөйкәлмә — ҡыҙымды ғына алырмын да сығып китермен». Уйланы ла эҫеле-һыуыҡлы булып китте: «Әллә Айзилә минең ҡыҙым түгелме?! «Мин һине алданым!» — тине бит.

«Юҡ! — тип екерҙе үҙенә. — Юҡ! Үҙенде ҡулда тот, ир бул, ниһайәт». Әрһеҙ һағыҙаҡты ҡыуған һымаҡ башын сайҡаны. Үлгән ерҙән ҡабаттан терелде.

— Һин ҡайҙа йөрөйһөң ул? Кәүҙәң бында, ә уйың? — тип уға эйелде етәксеһе. — Тыңла, хәҙер һиңә сығыш яһарға тура киләсәк.

***

Төн уртаһына тиклем барған йыйылыштан һуң ғына ҡайтып инделәр.

Урам тын. Хатта эттәр ҙә өрмәй. Шофер егет ҡараңғыға текләп:

— Аһ, әллә Мәликә апай инде, — тигәс, Заһирҙың эсе «жыу» итеп китте.

— Ҡайҙа?

— Ана, паркта, күрәһегеҙме?

Ул башы менән яҙ ғына ултыртылған йәш ҡайындар араһына ымланы. Фара яҡтыһында үҙ-үҙен ҡосаҡлап көшмөрәп торған ҡатынды инде Заһир ҙа абайланы. Машинанан төшә һалып, шунда атлыҡты. Яланбаш, яурынына шәл генә һалып сыҡҡан ҡатын көҙгө һалҡынға ҡорошоп ҡатҡан һымаҡ ҡымшанманы. Заһир курткаһын сисеп, уға кейҙерҙе, туңып төшкән ҡошсоҡ кеүек боҙҙай һалҡын ҡулдарын усына йомоп тынын өрҙө. Хәүефләнеп күҙҙәренә ҡалҡып ҡараны ла эсенә йылы йүгерҙе — Мәликәнең ҡарашында баяғы нәфрәт юҡ ине.

— Нимә булды һиңә? — тип һораны. Тауышында ялыныс ишетелде. — Нимә булһа ла әйт. Йәшермә. Ни генә булһа ла, мин һинең яҡлы.

— Мин ҡыҙыбыҙҙы таптым, Заһир. Үҙебеҙҙең ҡыҙҙы, — тине Мәликә шым ғына, уйсан ғына. — Көтмәгәндә, уйламағанда осраттым. Яҡында ғына йәшәгән. Бер сәғәтлек кенә юлда. Ә мин шуны нисәмә йыл һиҙмәгәнмен.

***

Эйе, Мәликә уны шунда уҡ танығайны. Алтынсы класта асыҡ дәрес биргән әҙәбиәт уҡытыусыһы:

— Хәҙер беҙгә ул шиғырҙы Миләүшә Мәжитова һөйләп күрһәтә, — тип әйтеү менән урынынан тороп таҡта янына сыға башлаған ҡыҙыҡайға ҡараны ла хайран ҡалды. Бит остарына саҡ ҡына ал йүгергән апаҡ йөҙлө, ҡуңыр сәсле һөйкөмлө ҡыҙҙы ул бик яҡшы белә ине. Эйе, һис тә яңылышырлыҡ түгел: алтынсы класта Мәликә үҙе тап шундай ине. Хатта шундай фотоһүрәте лә бар. Миләүшә лә сәсен йыйнаҡ итеп сикәләп үргән. «Хәҙер сығып баҫа ла, итәк осон семтеп, саҡ ҡына аяҡ ослай, шунан ҡарашын өҫкә төбәп һөйләй башлай», — тип уйланы Мәликә иреҡһеҙҙән. Ҡыҙыҡай тап шулай баҫып, Мостайҙың стенаға эленгән портретына текләп, яғымлы тауыш менән һөйләргә кереште. Аптыраманы ла, тетрәнмәне лә Мәликә. Йәнен сорнаған наҙға иҙерәп, ҡыуанып тик ултырҙы. Ҡыҙыҡай инде күптән шиғырын һөйләп бөтөп, «бишле» алып, урынына барып ултырғас та, унан күҙҙәрен айыра алманы.

«Донъяла ошондай ҙа рәхәтлек бар икән!» Ҙур ғаиләнең күмәге лә йыйылған саҡта әсәләренең: «Ҡалай донъяма ҡот тулды. Бөтәгеҙ ҙә янымда булғас, күңелем туҡ булып ултырам», — тигәне иҫенә төштө. Тотош донъяға ҡот тулғанын да, күңеленең туҡлығын да бер юлы тойҙо. Сарсап килеп туйғансы һыу эскән һымаҡ ине. Ҡыңғырау шылтырауға тәмле йоҡоһонан уянғандай һиҫкәнеп тирә-яғына ҡараны. Асыҡ дәрестәге башҡа уҡытыусылар артынан эйәреп ишеккә барған саҡта, йөрәгенең һеңере тартылған һымаҡ ауыртынып, Миләүшәгә баҡты. Әхирәтенең хәбәрен тыңлар-тыңламаҫ хәлдә иҫке генә портфелен ябып маташҡан ҡыҙыҡай, уның ҡарашын осратып, ҡыйыуһыҙ ғына йылмайҙы. «Ҡуйыныма йәшерергә лә алып ҡайтырға, башҡаса эргәнән ебәрмәҫкә! Эсемә һыйған балам, тышыма һыйыр!» — тип типте йөрәге. Ҡапыл биләп алған тыйғыһыҙ теләген көскә йүгәнләп, кластан сығырға ашыҡты ҡатын. Үҙен: «Ҡабаланма! Был юлы ашыҡма! Тыныслан!» — тип өгөтләне. Ҡуйынға ғына һыйырлыҡ түгел инде ул хәҙер...

Шулай ҙа тыйыла алманы, башланғыс кластарҙың дәресе бөткәс, кейем элгестәр янында бәләкәс кенә малайҙы кейендереп маташҡан ҡыҙыҡайҙың эргәһенә килде.

— Мырҙаңмы? — тигән булды, улар эргәһенә сүгәләп.

— Эйе, — тине Миләүшә оялсан ғына. — Беренселә уҡый. Тыңламай, бер кейенә белмәй. Тура ғына ҡайт бөгөн, һуғышып йөрөмә. Атыу әсәйгә әйтәм. Ишеттеңме? — тегеһе йомро башын сайҡаған булды танауын шурылдатып.

Мәликә иреҡһеҙҙән көлөмһөрәп малайҙың тырпый сәсен һыйпаны.

— Бигерәк оҡшаны шиғыр уҡыуың, — тине ул мырҙаһын ишектән оҙатып кире ингән ҡыҙға. — Мин дә шиғыр яратам. Хатта ҡыуандым. Ҡана шуның өсөн бер ҡосаҡлап һөйәйем әле, яраймы? — Ҡосаҡланы ла, йомшаҡ ҡына ҡуңыр сәстәргә битен терәп, тәрән итеп һуланы. «Өләсәмдең, әсәмдең, минең сәсем — беҙҙең нәҫелдең оҙон ҡуңыр сәсе. Беҙҙең еҫ. Таныш, күңелгә ятышлы. Үҙ балаң йәненә шул тиклем үҙ була икән дә».

Ә йөрәге уның күкрәгендә дөп-дөп иткән бәләкәс йөрәкте тойҙо. Таныны. Үҙенең күкрәк аҫтында тумалып нисәмә ай ҡуша типкән йөрәкте нисек танымаһын?!

***

— Ә һин теге ваҡытта ышанманың, — тине Мәликә, иренә әсенеп. — Берегеҙ ҙә мине тыңламаны. Депрессия, психоз, тип диагноз ҡуйырға ашыҡтығыҙ. — Тауышында ярһыу тиҫкәрелек тә, ышанмау ҙа ишетелде: хәҙер нисек? Һин ысынлап та минең яҡлымы?

— Нишләп улай булды һуң? Нишләп? — тип ҡабат-ҡабат һораны Заһир.

Мәликәнең ваҡытында хәүефле, ҡурҡыныс, сәйер булып тойолған, инде әллә ҡасан онот булған, әллә күпме ҡыуаныстар, бәхеттәр менән ҡапланған шик-шөбһәләренең көтмәгәндә яңынан ҡалҡып сығыуы, ҡалҡыуы ғына түгел, уларҙың дөрөҫ булыуы ихтималы уны шаҡ ҡатырҙы. Эстән, әллә ҡайҙан күтәрелгән ризаһыҙлыҡ, ҡаршылыҡ тойғоһон ихтыяр көсө менән генә ауыҙлыҡлап торҙо. Мәликәнең баяғы нәфрәте, әле тауышында яңғырап киткән ярһыу тиҫкәрелеге һағайтты. Йәненән артыҡ күргән Айзиләһенең үҙҙәренеке түгеллеген таныу башҡа һыймаҫлыҡ ине.

— Нишләп улай булырға тейеш һуң ул?

Табиптарҙың ҡурҡытыуына ҡарамаҫтан, Мәликә ауырын еңел күтәрҙе. Күңеле болғанып та йонсоманы, анализдары ла сағыштырмаса һәйбәт булды. Бәхет, күтәренке күңел — шулар сәбәпсе булғандыр быға. Борсолорға һис урын булмаған һымаҡ ине. Шулай ҙа табиптар, ваҡыт яҡынлашҡас, Өфөгә барып алданыраҡ ятырға кәңәш итте. Риза ине буласаҡ әсә. Тыны менән тартып алырҙай булып көткән сабыйы иҫән-аман ғына тыуһын! Тик тыуым менән үлемде белеп буламы ни — барыһы ла көткәндән алдараҡ башланды. Бында ла тәүҙә гел ыңғай булды, оҙаҡ йонсотманы бәпәй. Инде бала табыу йортон уратып йүгерекләгән Заһирға: «Ҡыҙың бар!» — тип һөйөнсөләп тә өлгөргәйнеләр, әсәнең хәле кинәт хөртәйҙе — ҡанын туҡтата алмай аҙапланғас, Өфөнән самолет саҡыртырға мәжбүр булдылар.

Бала — бында, әсә Өфөлә хәл өҫтөндә ята. Заһир ул мәлдәрҙе хәтерләргә яратмай. Иҫләһә, тик туғандарының, дуҫтарының, ата-әсәләренең, хатта ете ят кешеләрҙең дә игелегенә, ярҙамсыллығына рәхмәт тойғоһонан ғына. Эйе, ҡыйын булды, тик ғазаптарҙан һуң бәхет килде бит. Бер ай тигәндә әсәй ҙә һауығып ҡайтты. Донъялары түп-түңәрәк булды. Түңәрәк тип ҡыуанып тик йөрөгән...

*(Дауамы киләһе һанда.)*

podpiska.pochta.ru

# «ТАМЫРҘАРҘА ҠАН УЙНАҺЫН, ОЙОМАҺЫН»



*Ул бөтә ғүмерен ябай күҙгә күренмәҫ донъяны – микробтар һәм бактериялар мөхитен өйрәнеүгә арнаған. Ил кимәлендә билдәле ғалим Дамир Әсхәт улы Вәлишин, параллель йәшәүсе вирустар һәм кешеләр донъяһын сағыштырып: «Вирустың да, әҙәм балаһының да яһил булмағаны оҙағырак ғүмер итә», – тип ҡабатларға ярата.*

*Ике тиҫтә йылға яҡын Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш баш инфекционисы вазифаһын башҡарып, ул республикабыҙҙа йоғошло сирҙәрҙән дауалау кимәлен заманса кимәлгә күтәреүгә баһалап бөткөһөҙ өлөш индергән. Коронавирус пандемияһының иң ҡатмарлы осоронда республикабыҙ инфекционистарының кәңәшсеһе, таянысы, улар эшенә йүнәлеш биреүсе лә була ул. Медицина фәндәре докторы, профессор Дамир Әсхәт улы Вәлишин менән әңгәмәбеҙҙе гәйрәтен юғалтһа ла, һаман китергә теләмәгән вирус хаҡындағы һорауҙан башланыҡ.*

**– Бөгөн, коронавирустың көсһөҙләнеүенә ҡарап, пандемия бөттө, тип әйтеп буламы? Әллә ул дауам итәме? Сөнки һаман ғүмерҙәр өҙөлә, сирҙе ауыр кисереүселәр ҙә бар бит.**

– Пандемия башланғанда вирус, ут сәскән аждаһалай, үтә лә зәһәр ине, ауырыуҙар ныҡ ҡаты сирләне, күптәрен дауахаталарға һалырға тура килде. 2020-2021 йылдарҙа, инфекция ҡоторғанда, хәтерләйһегеҙҙер, республикала 37 госпиталь эшләне, әле иһә улар дүртәү генә. Ошо ғүмер эсендә вирус ҙур үҙгәреш кисерҙе, яуызлығын юғалтты, кешегә килтергән зыяны кәмене. Әммә ул вакцина ҡуйған кәртәне лә, сирҙән һуң барлыҡҡа килгән тәбиғи иммунитетты ла еңел генә үтергә «оҫтарып алды». Мәҫәлән, прививка эшләткәндәр ҙә, коронавирустың ауыр «дельта» штамын кисергәндәр ҙә һуңыраҡ барлыҡҡа килгән «омикрон»дан ҡотолоп ҡала алманы. Ләкин тәүге мәлдәр менән сағыштырғанда, сырхауҙар улай сәсрәп сирләмәне.

Шул уҡ ваҡытта хәүеф төркөмөнә ҡарағандарға: шәкәр диабетынан, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан, яман шештән яфаланғандарға, иммун системаһы ҡыйралған кешеләргә һәм башҡа етди сирҙәрҙән, һимереүҙән интегеүселәргә инфекция һаман да ҙур ҡурҡыныс тыуҙыра. Ковид йоҡторғандан һуң йыш ҡына уларҙың төп сирҙәре көсәйә. Хроник ауырыуҙары дүртәү-бишәү икән, хәлдәре бермә-бер ҡатмарлаша. Ә инфекция сәләмәт кешегә йоҡҡан осраҡта, бөгөн уның оло зыян килтерерлек гәйрәте юҡ.

Коронавирустың үҙе тураһындағы күҙаллауҙарҙы юҡҡа сығарыуын һыҙыҡ өҫтөнә алам, уға бәйле хәлдең артабан нисек буласағы, пандемияның ҡасан бөтәсәге тураһында тәүге мәлдәге бер фараз да аҡланманы. Әйтәйек, көҙөн-ҡышын таралыусы респиратор, йәғни һулыш ағзалары сирҙәрен миҙгел ауырыуҙары тип атаһаҡ, улар кеүек үк иң элек тын юлдарын зарарлаусы коронавирус менән халыҡ йыл әйләнәһенә ауырый. Әле лә уның ниндәй йүнәлештә үҙгәрәсәген асыҡ ҡына

**БЕЛЕШМӘ:**

Дамир Әсхәт улы Вәлишин 1962 йылдың 5 июлендә Саҡмағош районы Иҫке Ихсан ауылында тыуған. 1985 йылда Башҡорт дәүләт медицина институтын тамамлаған. Медицина фәндәре докторы, профессор. БДМУ-ның йоғошло сирҙәр кафедраһы мөдире, ошо уҡыу йортоноң дауалау эше буйынса проректоры. Башҡортостан Инфекционистар йәмғиәте рәйесе. 2003 йыл башынан 2022 йыл аҙағына тиклем республикабыҙ һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш баш инфекционисы булып эшләй. Коронавирус инфекцияһына ҡаршы көрәштә фиҙакәрлеге өсөн Пирогов исемендәге орден менән бүләкләнгән.



podpiska.pochta.ru




әйтә алмайбыҙ. Вирустың йәнә киҫкен үҙгәреп, яңы төрө тыумаҫ, тип раҫлап булмай. Сөнки ковидтың тотошон, мәҫәлән, эҫе ҡояш нурҙары зарарлы микробтарҙы юҡҡа сығарған йәйге селләлә уның ни рәүешле таралыуын ғалим-эпидемиологтар аныҡ ҡына билдәләй алмай.

Ковидтың тәүҙә шулай йәшен тиҙлеге менән таралыуына ул ваҡытта кешеләрҙең илдән илгә, ҡитғанан ҡитғаға иркенләп йөрөүе сәбәпсе булды. Бөгөн халыҡ сит илдәргә элекке менән сағыштырғанда һирәк сыға, тимәк, вирусты ла аҙыраҡ алып ҡайта. Ниндәйҙер яңы штамм барлыҡҡа килгән хәлдә лә, ул, әйтәйек, Европалағы, Азиялағы кеүек киң таралмай. Бөтәһе лә тиерлек сирҙе үткәргән, вакцина яһатҡан, күмәк иммунитетыбыҙ бар. Иң мөһиме – унан дауаларға өйрәндек, кешеләр һаҡланыу сараларының әһәмиәтен аңлай. Ҡурсаланыуҙың иң ябай, һөҙөмтәле ысулы – ҡулдарҙы ентекләп йыуыу ҡаныбыҙға һеңде. Вирус тарала башлағанда кешеләр антисептик ҡулланып, ҡул йыуырға «өйрәнгәс», эсәк инфекциялары юҡҡа сығыуын билдәләп үткем килә.

**– 2020 йылдың көҙөндә «Башҡортостан ҡыҙы»на биргән интервьюғыҙҙа, күңел тигеҙлеген һаҡлаған, күтәренке кәйефтә булған кешеләр сир йоҡторған хәлдә лә уны сағыштырмаса еңел үткәрә, тигәйнегеҙ.**

– Эйе, ковид-госпиталдә бүлек мөдире булып эшләү дәүерендә сирләнең нисек сәләмәтләнеүе уның психологик торошона нык бәйле икәнлеген күреп йөрөнөм. Төшөнкөлөккә бирелмәгән, мотлаҡ һауығасағына ышанған ауырыуҙар тиҙерәк аяҡҡа баҫты – хатта үпкәһенең күпселек өлөшө зарарланған осраҡта ла. Йәнен ҡурҡыу биләгән, рухы һүнгән сырхауҙар иһә инфекцияны бик ауыр уҙғарҙы, араларында үлеүселәр ҙә булды. Ә һәр ике осраҡта ла бер үк төрлө дауалау тәғәйенләнә ине бит. Уларға ҡарап, боронғо римдәрҙең:

«Еңеүсенең хатта яралары тиҙерәк уңала», – тигән һүҙҙәрен иҫкә төшөрә торғайным.



Йәшәйешебеҙ физика, тәбиғәт закондарына ҡәтғи буйһонған, был һаулығыбыҙҙа ла сағылыш таба, сөнки кеше – тәбиғәттең бер өлөшө, тиер инем.

**– Ниндәй закондар тураһында һүҙ барыуын аңлатһағыҙ?**

– Мәҫәлән, энергияны һаҡлау законын ғына алып ҡарайыҡ: энергия бер ҡайҙа ла юғалмай, ул бер есемдән икенсеһенә күсә. Ньютондың өсөнсө законын иҫкә төшөрәйек: нимә сағылдырабыҙ, шуны алабыҙ. Мәҫәлән, йөрәге һөйөү, мәрхәмәт менән тулы кешегә яуап булып шул уҡ хистәр ағыла. Уларҙың йоғошло сирҙәргә ҡаршы тороусанлығы ла юғары.

Бөтә сир ҙә – нервынан, тигән һүҙ дөп-дөрөҫ. Депрессия, стресс иммун системаһын сафтан сығара. Ярһыу, көсөргәнешле кеше вирусты тиҙ эләктереүсән, ковидты ғына түгел, башҡа йоғошло сирҙе лә. Сөнки уның халәте зәһәр вирусты үҙенә тарта, ҡан тамырҙары ҡыҫыла, ҡанының биохимик торошо үҙгәреп, инфекция үсеше өсөн ҡулай шарттар тыуа.

Мәктәптә физика закондарын формулалар буйынса ғына түгел, тормош өсөн ҡулланырлыҡ итеп тә өйрәтһәләр, нисек яҡшы булыр ине. Ә бит уйлап ҡараһаҡ, иң ябай ҡанун-ҡағиҙәләр – йәшәйешебеҙ нигеҙе лә баһа! Улар мең йыллыҡтар дауамында килә. Башҡаға зыян итеүҙе, урлашыуҙы, ғәйепләүҙе тыйған дини тәғлимәтте генә хәтергә төшөрәйек. Ни өсөн әҙәм балаһы юл ҡағиҙәләрен тайпылмай күҙәтә лә төп тәғлимәтте иҫтән сығара? Юлда ҡағиҙә боҙоу тәртипһеҙлеккә, хатта фажиғәгә килтергән кеүек, тормош ҡанундарын онотоу ҙа хәүеф менән янай бит: күңел тынысһыҙлығына, тимәк, һаулыҡ проблемаларына сәбәпсе була.

**– Ковид шуныһы менән әһәмиәтле: ул йоғошло сирҙәрҙең ҡан тамырҙарын ҡыйратыуын асып һалды, тигәйнегеҙ...**

– Мин 30 йыл инде буласаҡ табиптарға лекция уҡығанда йоғошло ауырыуҙарҙың иң элек ҡан тамырҙарына зыян килтереүе хаҡында һөйләйем. Күпселек инфекционистар ҙа шул уҡ фекерҙә белдерә, сөнки гриптан, төрлө респиратор ауырыуҙарынан һуң инфаркт, инсульттарҙың артыуын йыл һайын күҙәтәбеҙ. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, киҙеүҙең ул ҡурҡынысы баһаланып еткерелмәне. Коронавирус кисереүселәрҙең ҡан тамырҙары зарарланыуы иһә анализдар, тикшереүҙәр һөҙөмтәһендә дәлилләнде. Инфекцияны еңгән байтаҡ кешеләрҙең өс-дүрт айҙан баш мейеһенә йә йөрәгенә ҡан һауыуҙан ҡапыл ғына вафат булыуы ла быны ап-асыҡ раҫлай.

**– Ҡан тамырҙарын вирус һөжүменән һаҡлау өсөн ниндәй кәңәш бирер инегеҙ?**

– Иң мөһиме – ҡан ҡуйырыуына унда төйөрҙәр барлыҡҡа килеүенә юл ҡуймау. Ҡанығыҙ ойомаһын, ә уйнаһын, тамырҙар буйлап тигеҙ йүгерһен өсөн, үҙегеҙгә ҡулай физик әүҙемлекте һайлағыҙ: йүгереүме, йөҙөүме, тир сыҡҡансы шәп атлаумы, йогамы, еңел күнегеүҙәрме. Йөрәк-ҡан тамырҙары сиренән интегеүселәр, бынан тыш, ҡан ҡуйырыуына ҡаршы дарыу эсергә онотмаһын. Көн тәртибен, йәғни режимды күҙәтеү, яҡшы итеп йоҡлау зарур, мөмкин тиклем йонсомаҫҡа, стресҡа, ауыр уйҙарға бирешмәҫкә тырышығыҙ. Бөгөн улай йәшәп буламы ни, тиер ҡайһы берәүҙәр. Ата-бабаларыбыҙҙың «ҡайғыла ла, шатлыҡта ла, иң көсөргәнешле мәлдә лә тигеҙлекте һаҡларға кәрәк», тигән аҡылын тотһаҡ, була, тип яуап бирәм уларға.

Әңгәмәне **Альмира КИРӘЕВА** алып барҙы.



podpiska.pochta.ru



# МИЛЛИ АСЫЛЫБЫҘҘЫ ҺАҠЛАУСЫЛАР

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының үҙенсәлекле баш кейеме — гәләбәште (кәләпәш) башлыса Хәйбулла яҡтарында осратырға мөмкин. Сөнки был яҡта уны тергеҙеүсе оҫталар бихисап.

Кәләпүш (гәләбәш, башкейем) — бейек түбәле, мәрйен-көмөш менән биҙәлгән арҡалығы булған шлем рәүешендәге баш кейеме. Уны хандарҙың, тархандарҙың ҡатындары кейгән. Костюмдың логик тамамланышы булараҡ, һиммәтле баш кейеме үҙендә мөһим мәғәнәүи мәғлүмәт йөрөткән. Уға ҡарап, кешенең мөлкәтен, ғаилә хәлен һәм йәшен билдәләгәндәр. Яҡшы һаҡлау сараһы булараҡ та ҡулланылған: башлыҡҡа тегелгән тәңкәләр, үҙенсәлекле ювелир биҙәүестәр, аҡыҡ, ҡабырсаҡтар, ынйы, мәрйен, ҡош мамыҡтары, тырнаҡтары һәм башҡа ғәҙәти булмаған әйберҙәр бетеү ролен үтәгән. Әлбиттә, бөгөн уны элекке ваҡыттағы кеүек тәңкә, мәрйендәр менән яһау мөмкин түгелдер, әммә оҫталар гәләбәште хәҙерге биҙәү әйберҙәре, аҡсалар менән эшләй. Шундай оҫталарҙың береһе — **Хәйбулла районы Әбүбәкер ауылында йәшәүсе Гөлсинә Билалова.**

— Беҙҙең ғаиләлә дүрт ҡыҙ һәм ике малай үҫте, шуға күрә бәләкәйҙән һәр беребеҙ бәйләү-тегеүгә маһир булдыҡ. Әсәйем



podpiska.pochta.ru



**«Бүләк», «Йәшлек», «Сулпылар», «Ҡара юрға» ижади коллективтары етәксеһе Әлфиҙә Ултыраҡова**

Сәмиғә Фәтхулла ҡыҙы ҡул эштәренә бик оҫта ине, кис һайын унын янына ултырып, апайһеңлеләребеҙ менән бергә нимәлер тегергә, бәйләргә өйрәндек. Аҙаҡ был шөғөл көндәлек ғәҙәткә әйләнде. Беребеҙ — ойоҡбаш, икенсебеҙ бейәләй бәйләй. Беҙҙең быуынға, бөгөнгө кеүек, йәнең ни теләй, шуны һатып алып кейергә мөмкинлек тә, тауар ҙа, кейем-һалым да булманы. Ҡыҙҙарбыҙ бит, зауыҡлы кейенге, матур күренге килгәндер инде, шуға күберәк модалы әйберҙәрҙе, итәккүлдәктәрҙе әсәйем бесеп, үҙебеҙ тегеп кейә торғайныҡ. Шуныһы ҡыуаныслы: барыбыҙ ҙа әсәйебеҙ кеүек ҡул эшенә маһир, кәрәк икән, милли күлдәк тә тегәбеҙ, селтәр, ҡашмау, таҡыя, гәләбәшен дә эшләйбеҙ, — ти Гөлсинә Билалова.

Ғаиләлә үҫкән дүрт ҡыҙ — Әсмә, Гөлшат, Гөлсинә һәм Әлфиҙә — барыһы ла бер ауыл биләмәһендә йәшәй. Һәләтле ханымдар милли күлдәк тегеү, биҙәүестәр яһау менән мәшғүл. Уларҙың нәзәкәтле ҡул эштәре ҙур һорау менән ҡулланыла.

Әлфиҙә Ултыраҡова — Әбүбәкер ауылының «Бүләк» йыр һәм бейеү, «Йәшлек», «Сулпылар», «Ҡара юрға» ир-егеттәр вокаль коллективтары етәксеһе, ауылдың мәҙәни тормошона йәм һәм дәрт биреүселәрҙең береһе. Ҡалған һылыуҙар — Әлфиҙә Ғәфүр ҡыҙы етәкләгән «Бүләк» йыр һәм бейеү ансамбленең әүҙем ағзалары. Ижади коллективтың репертуарына халыҡ моңдарынан алып ретро, эстрада, лирик йырҙарға тиклем ингән, шулай уҡ үҙҙәре сығарған таҡмаҡтар, ошо төбәккә хас йыр-бейеүҙәр урын алған. «Бүләк» — ауылдың йәме генә түгел, район халҡының төрлө мәҙәни сараларҙа көтөп алған яратҡан ансамбле лә. Ҡайҙа ғына сығыш яһаһалар ҙа, тамашасы уларҙы һәр саҡ көслө алҡыш менән оҙатып, күңелдәренә бүләк алғандай ҡыуанып ҡайта. Ижади эшмәкәрлектәренән тыш, ауылдың йәмәғәт тормошонда ла әүҙем ҡайнап йәшәй улар.

«Әсмә апайыбыҙ — бағыусыбыҙ», — тип көлөшә һылыуҙар. Милли әйберҙәрҙе, кейемдәрҙе әҙерләү өсөн тауар, төрлө кәрәк-яраҡ менән һеңлеләрен тәьмин итә икән иң өлкәндәре.

— Ҡул эшенә оҫталыҡ әсәйебеҙҙән булһа, йыр-моңға һәләт атайыбыҙ Ғәфүр Хажиәхмәт улы яғынан күскәндер, — ти һылыуҙар. — Атайыбыҙ скрипкала матур уйнаны. Моңло итеп йыр һуҙһа, әсәйебеҙ уға ҡушылып йырлар һәм һикереп төшөп бейеп тә китер ине. Һәләтле нәҫел дауам итә: әлеге көндә Наҙгөл ҡыҙыбыҙ — вокал, Айгөлөбөҙ театр бүлегендә белем ала. Гөлдәр — думбыра, Рәдиф ҡурай бүлеген тамамланы. Әйткәндәй, уҙған йылда Йомабай Иҫәнбаев исемендәге республика конкурсында Гран-при яулаған Рәдиф Бохарбаевты хәҙер барыһы ла яҡшы белә. Арабыҙҙа гармунсылар, ҡурайсылар күп булғас, беҙҙә бөтә мәжлес йыр-моң менән үтә, — тип һүҙҙәрен йомғаҡлай оҫталар.

Әле «Айыҡ ауыл» республика конкурсында ҡатнашҡан Әбүбәкер ауылында төрлө саралар гөрләп уҙа. Бер туған һылыуҙар уларҙың барыһының да уртаһында ҡайнай. Әсмә, Гөлшат, Гөлсинә, Әлфиҙә кеүек ҡатын-ҡыҙҙар — ауыл биҙәге. Улар тирәләй тормош әйләнә һәм милли асылыбыҙ һаҡлана.

**Роза РӘСЕМБӘТОВА.**
Хәйбулла районы.



podpiska.pochta.ru

# БЕҘ БЕРГӘ БУЛҒАНДА

*Ләйсән Йәркәй ҡыҙы Йосопова — Өфө фән һәм технологиялар университетының Стәрлетамаҡ филиалы доценты, тарих фәндәре кандидаты. Абруйлы уҡытыусы һәм ғалимә генә түгел, әүҙем йәмәғәтсе булараҡ та билдәле ул: оҙаҡ йылдар Стәрлетамаҡ башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетын етәкләй. Республикабыҙҙың һәм Стәрлетамаҡ ҡалаһының ижтимағи тормошондағы ҡаҙаныштары өсөн Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының иң юғары наградаһы — «Ал да нур сәс халҡыңа!» миҙалы менән бүләкләнгән. Аҫыл милләттәшебеҙҙең күп яҡлы шәхес булараҡ балҡыуы һоҡланыу, ихтирам уята.*




**— Ләйсән, һеҙҙең арҙаҡлы ижадсылар — тележурналист Йәркәй Яҡшыдәүләтов менән яҙыусы Нажиә Игеҙйәнованың ҡыҙы икәнегеҙҙе беләбеҙ. Үҫкән саҡта атай-әсәйегеҙҙең һеҙгә ниндәй йоғонто яһауы хаҡында һөйләһәгеҙ ине.**

— Ғаиләлә тәүге бала булып тыуғанмын. Минән һуң донъяға килгән Гөлфиә һәм Айсыуаҡ туғандарым менән йәш араларыбыҙ ҙур түгел: һеңлем минән ике йәшкә, ҡустым өс ярым йәшкә бәләкәйерәк. Атайым менән әсәйем эштә саҡта, апай булып, туғандарымды ҡарап ҡала торғайным.

Ата-әсәбеҙ һәр беребеҙҙе шәхес итеп күрҙе. Улар беҙҙе бик иртә китап иленә алып инде, бөтәбеҙ ҙә мәктәпкә барғансы уҡ уҡырға, шахмат уйнарға өйрәндек. Беҙҙең өсөн «Веселые картинки», «Мурзилка» журналдарын яҙҙыра торғайнылар. Ул заманда балалар өсөн башҡортса журналдар сыҡмай ине, шуға күрә Гөлфиә Юнысова, Кәтибә Кинйәбулатова һәм башҡа шағирәләрҙең китаптарын ҡулдан төшөрмәй уҡыныҡ.

Хәтеремдә: совет заманында Матбуғат йортонда гәзит-журнал хеҙмәткәрҙәре өсөн яңы фильмдар күрһәтә торғайнылар. Өсөбөҙҙө лә атайым менән әсәйем мотлаҡ рәүештә ул фильмдарҙы ҡарарға, шулай уҡ театрҙарға премьераларға алып бара. Ундағы ижади мөхиттән ныҡ тәьҫирләнеп ҡайтабыҙ. Фильмдар хаҡында фекер алышыуҙарҙы тыңлап, әҙәби әҫәрҙәрҙе дәрестәгенән дә нығыраҡ хәтерҙә ҡалдыра инек.

Алғараҡ китеп шуны әйтәм: әсәйем менән атайымдың күп матур тәрбиә алымдарын үҙ балаларымды үҫтергәндә лә файҙаландым. Мәҫәлән, уларҙы мәктәпкә барғансы уҡ уҡырға, һанарға һәм шахмат уйнарға өйрәттем. Был иһә балаға мәктәптә яҡшы өлгәшергә, ҡатмарлы мәсьәләне еңел сисергә, ауырлыҡты үтергә әҙер булырға ярҙам итә.

Өсөбөҙ ҙә юғары белем алдыҡ: мин — тарихсы, һеңлем — филолог, ҡустым — ихтиолог, ул БДУ-ның биология факультетын тамамланы. Айсыуаҡ һөнәре буйынса бер нисә йыл эшләне лә «БАЛ» авиакомпанияһына бортпроводник булып күсте. Ҡыҙғаныска ҡаршы, туғаныбыҙҙың ғүмере 2002 йылдың 2 июлендә Германия күгендә Боден күле өҫтөндә булған авиаһәләкәттә өҙөлдө. Дүрт көндән уға 31 йәш тулырға тейеш ине...

**— БДУ-ның тарих факультетын тамамлағас, йүнәлтмә буйынса Стәрлетамаҡҡа юлланғанһығыҙ. Ғилми һәм уҡытыусылыҡ эшегеҙ тураһында ла һөйләп үтһәгеҙ ине.**

— Тарих донъяһының мәңгелек серенә ғашиҡ иткән уҡытыусыларым — күренекле ғалимдар Әнүәр Әсфәндиәров, Софья Овруцкая, Рим Йәнғужин, Марат Ҡолшәрипов,



podpiska.pochta.ru

Ирек Аҡманов, Нәзир Ҡолбахтин, Айһылыу Юнысованы остаздарым тип иҫәпләйем.

Студент йылдарында дәртләнеп университеттың «Ирәндек» бейеү ансамбленә йөрөнөм. Уға БАССР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы, РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Екатерина Варламова етәкселек итә ине.

Хеҙмәт юлымды Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының Ватан тарихы кафедраһы ассистенты булараҡ башланым. Тәүге көндәрҙән үк студенттар менән уртаҡ тел таптым, йәш уҡытыусы өсөн был бик мөһим ине.

90-сы йылдар аҙағында тарихҡа иғтибар ифрат ҙур булды. Сал быуаттарҙы байҡап, тарихты яңыса аңлап, тормошсан күп һорауҙарға дөрөҫ яуаптар эҙләгән дәүер ине ул. Студенттар менән мәҡәләләр яҙабыҙ, конференцияла шул эштәр менән сығыш яһайбыҙ. Уҡыта башлағандың тәүге йылында кандидатлыҡ минимумы имтихандарын тапшырып, диссертациям темаһын раҫланым. Ғилми эшем «XIX быуаттың беренсе яртыһында Ырымбур губернаһы төньяҡ-



«Ғаиләм – ҡәлғәм»

көнсығыш башҡорттарының социаль-иҡтисади һәм сәйәси тарихы» тип аталды.

Диссертация яҡлағанда ғаиләм, ике балам: улым Илһам менән ҡыҙым Миләүшә бар ине. Архивта, китапханала эшләр өсөн Мәскәүгә киткән сағымда Өфөлә йәшәгән әсәйем ҡыҙымды үҙенә алып ҡараны. Ә мәктәптә уҡыған улым атаһы менән Стәрлетамаҡта ҡала торғайны. Яҡындарымдың оло ярҙамын тойоп, балалар өсөн йәнем тыныс булып, башкөллө ғилми эшкә сумдым... Тормош иптәшемә һәм әсәйемә шул осорҙағы хәстәрлектәре өсөн рәхмәтлемен.

**— Ни өсөн диссертацияғыҙҙы төньяҡ-көнсығыш башҡорттар тарихына арнарға булдығыҙ?**

— Әсәйем — сығышы буйынса Ҡыйғы районынан. Минең мәктәп каникулдарым әкиәти тәбиғәтле Ҡыйғы районындағы ауылда өләсәйем янында үтте. Унда халыҡ башҡорт теленең үҙенсәлекле диалектында һөйләшә, милли кейемдәре лә ныҡ айырыла. Диссертация өҫтөндә эшләгәндә шул яҡтарҙың ҡабатланмаҫ хозурлығы, үҙем белеп күргән матур күңелле кешеләре күҙ алдымда торҙо. Төньяҡ-көнсығыш башҡорттарының төбәк үҙенсәлектәрен мотлаҡ рәүештә башҡа этнографик төркөмдәр менән сағыштырып тикшереү зарур — бөтә Башҡортостан тарихын, мәҙәниәтен өйрәнеүгә йәнле ынтылыш тап шул рәүешле тыуа.

Бөгөнгө көндә 180 ғилми хеҙмәтем, шул иҫәптән өс монографиям донъя күргән. Улым Илһам менән берлектәге эштәрем дә бар. Береһе «Стәрлетамаҡ ҡалаһы буйлап 3D туристик маршрут» булһа, икенсеһе — «Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте» электрон дәреслеге. Мин был хеҙмәттәрҙең ғилми йөкмәткеһен әҙерләнем, ә улым уларҙы виртуаль программаларға күсерҙе.

Бына шулай бер юғары уҡыу йортонда 32 йыл күҙ асып йомғансы үтеп тә киткән. Йыл һайын студенттар алмашына, хатта уҡыу йорто, кафедралар, факультеттар исеме үҙгәрә, яңынан-яңы эш программалары яҙабыҙ, ләкин ошо уҡыу йорто төп эш урыным булып ҡала. Бынан тыш, Жәлил Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназияла тарих дәрестәре алып барам. Шайморатов класы балалары менән дә эшләйем, уларға Башҡортостан тарихын уҡытам.

**— Ваҡытығыҙ үтә тығыҙ булыуға ҡарамаҫтан, йәмәғәт эше менән дә әүҙем шөғөлләнәһегеҙ. Барыһына ла нисек өлгөрәһегеҙ?**

— Ике йыл Стәрлетамаҡ ҡала округының Йәмәғәт палатаһында эшләнем. 2015 йылда «Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)» йәмәғәт ойошмаһының Стәрлетамаҡ бүлексәһенә килдем. 2021 йылда «Стәрлетамаҡ ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы» урындағы йәмәғәт ойошмаһы» коммерция булмаған ойошмаһын астыҡ.

«Беҙ бергә» этнофестивале» тигән проектыбыҙҙың Мәҙәни башланғыстар буйынса Президент фонды гранттарының дүртенсе конкурсында еңеп сығыуы күңелдәргә илһам өҫтәне. Төрлө кимәлдәге башҡа бәйгеләрҙә ҡатнашыуға ла ғариза биргәнбеҙ.

Һуңғы йылдарҙа ҡаҙаныштарыбыҙ бихисап. Башҡорт теле йылы тип иғлан ителгән 2020 йылда республика ҡалалары ҡоролтайҙары араһында икенсе урын алдыҡ, 2021 йылда, Башҡорт тарихы йылында, беренселеккә сыҡтыҡ. Стәрлетамаҡ тарихы, яҙмыштары ҡалабыҙға бәйле билдәле башҡорт шәхестәре хаҡында китаптар сығарабыҙ. Күренекле милләттәштәребеҙгә һәйкәлдәр ҡуябыҙ. Мәҫәлән, 2021 йылда — мәғрифәтсе Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевҡа, былтыр шағир, сәйәсмән Шәйехзада Бабичҡа һәйкәл асылды.

Бөтә Рәсәй һәм республика кимәлендәге конференциялар үткәреүгә лә ҙур иғтибар бүленә. Ә йыл һайын яҙҙың беренсе көнөндә уҙғарылған «Етегән — ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көнө» республика байрамын күптәр Стәрлетамаҡ бренды тип атай.

Төп эшендән тыш, ижтимағи тормошта әүҙем булыу өсөн, иң элек янып ижад итеү, башҡаларға ярҙамлашыу теләге булырға тейештер. Һәм, әлбиттә, ғаиләнден аңлап тороуы кәрәк.

Тормош иптәшем Илшат Тимерғәли улы Йосопов Өфө фән һәм технологиялар университетының Стәрлетамаҡ филиалында инженер булып эшләй. Улыбыҙ Илһам БДУ-ның технология һәм эшҡыуарлыҡ факультетын ҡыҙыл дипломға тамамланы, әле ул — SMM-маркетолог. Өйләнгән, ейәнебеҙ Иҙелгә — өс йәш.

Миләүшәбеҙ Ҡазан федераль университеты эргәһендәге Халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институтын бөтөрҙө. «Яңы мәктәп» мәғариф онлайн-үҙәгендә инглиз телен уҡыта, япон телен дә белә. Ул да ғаиләле, Өфөлә йәшәй.

Мин ҙур ғаиләбеҙ бергә йыйылған ялдарҙы һәм байрамдарҙы яратам. Ундай көндәрҙә өйөбөҙ шау-гөр килеп тора. Бергә булғанда йөрәктәр көс-дәрт менән һуғарыла, һәм бәхеттең иң олоһо ошо инде, минеңсә.

**Эльвира ХАЛИҠОВА**
әңгәмәләште.

podpiska.pochta.ru

*Яратҡан журналыбыҙ иғлан иткән «Моңло сәңгелдәк» бәйгеһендә ҡатнашырға булғас, ҡәҙерләп һаҡланған боронғо бишекте һыйпап, хәтирәләр даръяһына сумдым. Ябай түгел, быуындан-быуынға күсеп килгән ҡомартҡы ул. Сәңгелдәккә бәйле иҫтәлектәр мине картатай-нәнәйҙәр йәшәгән дәүерҙәргә, халҡыбыҙ йола ҡанундарын тотоп көн иткән замандарға алып ҡайтты...*



# ҠОМАРТҠЫ БИШЕК




Ҡомартҡы сәңгелдәкте Әлшәй районы Яңы Сәпәш ауылында йәшәүсе 1859 йылғы ҡартатайым Әйүп Ҡотлоәхмәт улы Әйүпов яһаған. Ҡартатайыма 60 йәш булғанда тәүге ҡатыны донъя ҡуя. Элек башҡорттарҙа апай үлһә, еҙнәне балдыҙға өйләндереү, еңгә тол ҡалһа, ҡәйнешкә кейәүгә биреү йолаһын һаҡлағандар бит. (Йола хаҡында һүҙ сыҡҡас, бер аҙ ситкә китеп, шуны ла әйтәм: ҡартатайымдың атаһының биш ҡатыны булған, һәр ҡатынына ул айырым йорт һалып биргән, һәр береһенән бишәр-алтышар бала тыуған, барсаһын да ҡарарға ҡулынан килгән).

Йоланы тотоп, Әйүп ҡартатайға Зайра исемле балдыҙын алып бирәләр. Зайра нәнәйемә ул мәлдә 30 йәш була. 1919 йылда ғаиләлә Йәмилә исемле ҡыҙ (сәсәниә Розалия Солтангәрәеваның әсәһе) ауаҙ һала. Тәүге ҡатынынан тыуған өс балаһын күптән башлы-күҙле иткән ҡартатайым, шулай итеп, ҡулына йәнә бер сабыйын ала һәм шатлана-шатлана уға сәңгелдәк эшләй.

1929 йылда әсәйем Йәмиғә донъяға килә. Әйүп ҡартатайым был ваҡытта инде 70 йәшен тултыра. Ике ҡыҙын да үҫтереп, матур һөнәрле итеп, кейәүгә биреп, туй яһарға ла өлгөрә. Улай ғына түгел, үҙе эшләгән сәңгелдәктә ейәнсәрҙәрен — 1953 йылғы оло апайым Фәнзиләне, 1957 йылғы мине тирбәтеү бәхетенә лә ирешә. Ғүмере буйы намаҙ уҡып, ураҙаһын ҡалдырмаған ауыл аҡһаҡалы йөҙ йәшенә етәрәк мәңгелеккә күсә.

«Уңған» сәңгелдәк буш тормай. Унда, апайым менән минән тыш, һеңлеләрем — 1960 йылғы Ләйлә, 1963 йылғы Фирҙәүис, 1966 йылғы Рафаэль туғаным да бәүелеп үҫте. Беҙ барыбыҙ ҙа — йәй балалары. Ул заманда ҡатындарға декрет ялы ике ай ғына бирелгән. Әсәйем йүгереп ҡайтып, тиҙ генә балаһын имеҙеп китә. Уны бәпләп ултырырға ваҡыты юҡ. Апай менән икәү марляға икмәк һалабыҙ ҙа туғаныбыҙҙың ауыҙына ҡаптырабыҙ. Иламаһын өсөн, сәңгелдәк тирбәтә-тирбәтә, әсәйҙән ишеткән бишек йырын көйләйбеҙ. Ана шулай бер-беребеҙҙе ҡарап буй еткерҙек. Ул заманда һәр ғаиләлә сәңгелдәктә ятҡан сабыйҙарҙы бағыу олораҡ апай-ағайҙары иңенә төштө. Уйнарға сыҡһаҡ та, туғандарҙы сиратлап ҡарай торғайныҡ.

Бер-беребеҙҙе ҡайғыртыу, туғанлыҡ тойғоһо беҙгә ана шулай сәңгелдәктән һалынған. Бишек йыры яңғыраған ғаиләбеҙҙә ғәжәйеп һөйөү тантана итә ине. 1944 йылда фронтҡа алынып, япондарға ҡаршы һуғышта ла ҡатнашып, 1951 йылда ғына ҡайтҡан атайымды әсәйем тыны менән тартып алырҙай булып көтә. Улар һуғыштан һуң өйләнешә. Ҡәҙерле кешеләребеҙ һәр көндө оло бәхет итеп күреп йәшәне.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тәүге бәпестәре — Юлай тигән улдары күкрәк сабыйы ғына килеш донъя ҡуя. Ошо бала менән булған ғибрәтле хәлде әсәйем һаман да йыш иҫкә ала. Бәләкәй аласыҡта балаһын имеҙеп

**Иң затлы трансформер-коляскаларға ла, үҙенән-үҙе сайҡалып торған иң заманса бәүелсәктәргә лә алмаштырғыһыҙ ул — Ер-әсәбеҙ һулышы менән бер көйгә тирбәлеүсе сәңгелдәк.**

сәңгелдәккә һалып ҡына торғанда аҡ кейемле әбей килеп инә, бер һүҙ өндәшмәй, ти үҙе. Әбейҙе бала янында ҡалдырып, уға бирер өсөн хәйер артынан икенсе яҡҡа сыға, инһә, әбейҙән елдәр осҡан. Тегеләй йүгерҙем, былай ҡарандым — бер ерҙә лә юҡ, бер кем дә уны күрмәгән, ти. Юлай төнө буйы илап, иртәнгә йән биргән. Әсәйемдең йәш сағы бит инде, мулла алып килеп өшкөртөргә уйламаған, өшкөртһә, бәлки, улы иҫән дә ҡалыр ине. Ә теге әбей ен булып сыҡҡандыр, ти ул. Борон-борондан ололар йәш балаларҙы төрлө яуыз көстәрҙән нык ҡурсырға ҡушҡан. Был юҡҡа ғына түгел. Параллель донъялар барлығын ата-бабалар яҡшы белгән. Ғөмүмән, элек ен-шайтандар кеше күҙенә йыш күренеп йөрөгән, әле иһә ул турала һөйләүҙәр әкиәт кеүек ҡабул ителә.

Сәңгелдәкте борон талдан, миләштән, муйылдан, йүкәнән яһағандар — был ағастар һаҡлау көсөнә эйә, тип уйлағандар. Миләштән зәхмәт, ен-пәрейҙәр нык ҡурҡа, тип, айырыуса миләш сәңгелдәкте хуп күргәндәр. Сабый янына ен-пәрей килмәһен өсөн, сәңгелдәккә бетеү, боронғо китап, артыш сыбығын тағып ҡуйғандар. Баланы сәңгелдәктән алғас, урынына тимер әйбер (ҡайсы) һалырға кәрәк, ти торғайны әсәйем.

Ололар буш сәңгелдәкте тирбәтергә ҡушмаған, шайтан балаһын тирбәтәһең, тигәндәр. Бәпесте сит-ят күҙҙән һаҡлау өсөн шаршау элгәндәр.

Сәңгелдәк бәүелтеүсе ҡулдар киләсәкте тирбәтә, тиер инем, боронғо әҙиптең һүҙҙәрен саҡ ҡына үҙгәртеп. Биш балаға ғүмер биргән әсәйем Йәмиғә Әйүп ҡыҙы Вилдановаға март айында 94 йәш туласаҡ. Беҙ сәңгелдәгән бишектә ул 29 ейән-ейәнсәрен, бүлә-бүләсәрен бәүелтте, беҙгә йырлаған бишек йырын уларға ла көйләне һәм барсаһына ла оло юлға сығырға ярҙам итте. Илаһи көскә эйә ул көй нәҫелебеҙҙе дауам итеүсе йәштәрҙе ғүмер буйына оҙатып барасағын да беләм.

Балаларымды сәңгелдәктән үк тәрбиәләшкән, уларға бишек йырының серле аһәңен һалған ҡәйнәм Хәлимә Мөхәмәтрәхим ҡыҙы Мөфтиеваға ла йөрәгемдә сикһеҙ рәхмәт тойғолары йөрөтәм. Бөгөн уға, шөкөр, 96 йәш. Ҡәйнәм менән торғас, мин эшкә иртә сыҡтым: ҡыҙым — биш, улым ун айлыҡ ине. Өрләктә эленеп торған сәңгелдәктә биш балаһын үҫтергән ҡәйнәм 17 ейән-ейәнсәре һәм бүлә-бүләсәренең шатлығына ҡыуанып йәшәй.

Иң затлы трансформер-коляскаларға ла, үҙенән-үҙе сайҡалып торған иң заманса бәүелсәктәргә лә алмаштырғыһыҙ ул — Ер-әсәбеҙ һулышы менән бер көйгә тирбәлеүсе сәңгелдәк. Йортоғоҙҙоң ҡото булып, түрегеҙҙә сәңгелдәк биҙәһен, ҡәҙерле ҡәрҙәштәрем. Ата-әсәһенең, нәҫеленең һөйөүенә ҡойоноп, унда милләтебеҙ киләсәге үҫһен.

**Рәйсә МӨФТИЕВА,**
Әлшәй районы «Ағинәйҙәр» ойошмаһы етәксеһе, мәғариф ветераны.

podpiska.pochta.ru



podpiska.pochta.ru

# КӨС, ДӘРТ БИРӘ ТЫУҒАН ЕР

*Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында утыҙ йылдан артыҡ эшләү дәүерендә тамашасы күңелендә урын алған һанап бөтмәҫлек онотолмаҫ образдарҙы сәхнәгә сығарған был актриса. «Характерлы ролдәр өҫтөндә күп эшләргә тура килде, ә үҙемдең күңелемә иһә драматик образдар яҡын», – тип серен бүлешә ул. Был юлы Башҡортостандың халыҡ артисы Альбина КАШАНОВАла ҡунаҡтабыҙ.*

**Өләсәй һабаҡтарының мәғәнәһе йылдар үткән һайын киңәйә төшә.**

Балтас районының Түбәнге һикеяҙ ауылында тыуып үҫкән актриса. «Мин – өс баланың иң өлкәне донъяға килгәндә әсәйемә 30 йәш тула яҙған. Шөкөр, әлегәсә әсәйем менән атайым янына ҡайтып кәңәш итеү, уларға ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеү бәхетенә эйәбеҙ», – тип һөйөнөсө менән уртаҡлаша ул. Шамил ҡустыһы төҙөлөш менән шөғөлләнә, Гөлназ һеңлеһе педагог, психолог булып эшләй. Икеһе лә ғаиләһе менән район үҙәгендә йәшәй.

Әсәһе Флүзә Әғзәм ҡыҙы, оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, икмәген һалып, ҡоймағын ҡойоп ҡуя, тиҙ генә картуф шәңгәһе бешерә һала, бәлештәре лә иҫ китмәле тәмле. Ҡәҙерлем бешергән ризыҡтар ауыҙҙа иреп тора, мин тап ул өйрәткәнсә әҙерләһәм дә, уныҡына етмәй, ти рәхмәтле ҡыҙы. Ә йәш сағында мейес аштарына ваҡыты ҡалмай уның. Фельдшер булып эшләй, етмәһә, ун бер ауылға бер үҙе. Тынғыһыҙ эше арҡаһында өйгә һис йоҡмай, хатта мунса төшөп йөрөгән еренән, йыуынып бөтмәй, ауырыған кеше янына алып киткән осраҡтары ла йыш була. Фиҙакәр хеҙмәте өсөн уны 80-се йылдарҙа Сочиға ял итергә ебәрәләр. Шунда үзбәктәрҙән йөҙөм, күрәгә менән былау әҙерләргә, әлегә беҙҙең яҡта билдәле булмаған яңы ашамлыҡ – манты бешерергә өйрәнеп, һауытын да алып ҡайта.

Альбина апай өсөн был ризыҡ ҡунаҡ ашы булып күңелендә ҡала. Әсәһе ауылдаштарына ла өйрәтә, һауыт йылдар буйына «ҡайтмай» ауыл буйлап йөрөй, кәрәк булғанда өйҙән-өйгә йөрөп юллап алалар.

Атаһы Рәфис Ниғмәтйән улы – водитель, Пермь крайынан яғыулыҡ ташый, ул да көнө буйы эштән бушамай. Ейәнейәнсәрҙәренә Тәнзилә өләсәләре күҙ-ҡолаҡ була. «Бик бәхетле балалар булдыҡ беҙ, – ти Альбина апай. – Өләсәйем иҫ киткес тилбер, тиктормаҫ, гел аяҡ өҫтөндә булды. 92 йәшенә тиклем йүгереп йөрөнө, хатта ҡан баҫымы аҙ ғына ла күтәрелмәне (әсәйем көсләп тигәндәй үлсәп ҡарайым тиһә, ниңә кәрәк ул, тип үлсәтмәй ыҙалата әле). Эшләгәнең кешегә булһа ла, өйрәнгәнең – үҙеңә, тип ҡабатларға яратты ул. Ҡайһы саҡ эргәһенә саҡыра ла, ҡарап булһа ла ултыр, тип ултыртып ҡуя». Ейәнсәрҙәренең юл аша ғына булған мәктәптән сығыуҙарын ҡарап ҡына тора ла самауырын шыжлатып ебәрә, ишектән инеү менән балаларҙы тәмле аш еҫтәре ҡаршы ала. Ҡабаҡ бәлеше, бәрәмәс, тары табикмәге менән һыйлай. Бауырһаҡтары ҡабарып бешә...

Өләсәй һабаҡтарының мәғәнәһе йылдар үткән һайын киңәйә төшә. Альбина апай үҙ ғаиләһендә, бала тәрбиәләгәндә лә уларҙы йыш хәтеренә төшөрә. Алмас улдары, Фатима Мостафина исемендәге 20-се ҡала гимназияһын



тамамлағас, юғары уҡыу йортонда белем ала, унан һуң армия сафында хеҙмәт итә. Әлеге көндә Санкт-Петербург ҡалаһында банк системаһында уңышлы эшләй. «Улым элек балыҡ, ит ашамай ине, армиянан ҡайтҡас, һайланмай башланы. Хәҙер, алыҫта йәшәгәс, тамағын да үҙе ҡайғырта, интернеттан ҡарап төрлө тәғәмдәр бешерергә әүәҫләнгән», – тип һөйләй актриса. Әсәһенең ҡатыҡҡа ғына туғып, йоҡа ғына итеп ҡойолған, эремсек йәки йомортҡа, дөгө, йәшел үләндәр тултырылған ҡоймағын һағынып ҡайта ул хәҙер.

Тормош иптәше Мөнир – һаҡсы, төҙөлөштә лә эшләй. Ашын да, кәтлитен дә, ваҡ бәлешен дә, бәрәңге бөкөрәһен дә... – һөйгәненең хәстәрлекле ҡулдары бешергән һәр ризыҡты шөкөр итеп ҡаба ул.

Йылдарын актриса ғаиләһе менән ата-әсәһе янында үткәрә. Йәй буйы баҡсала йәшелсә-емеш тәрбиәләй, яҡындарын хәстәрләй, тыуған ауылы һауаһына кинәнә. Йыйған мәтрүшкә, ҡарағат япрағынан ҡыш буйы тәмле сәй эсеп рәхәтләнәләр. Тыуған ерҙән, ҡәҙерле кешеләрҙән алған йылылыҡ йәшәү көсө бирә, эштә лә дәрт, илһам менән ижад итергә этәрә. Күңел бөтөн булғанда, ваҡ-төйәк мәшәҡәттәрҙе йырып сығыуы ла еңел.

**Гөлшат ҠУНАФИНА.**

**Булат МАЛИКОВ** фотолары.

## «Яҙ еҫе» турамаһы

*Пекин кәбеҫтәһе, йомортҡа, ҡыяр, консерваланған кукуруз, йәшел тәмләткес үләндәр, тәменсә тоҙ, ҡаймаҡ кәрәк.*

Кәбеҫтәне, бешкән йомортҡаны, тәмләткес үләндәрҙе турайбыҙ. Тоҙ, ҡаймаҡ һалып бутайбыҙ. Йәшел тәмләткес үләндәр менән биҙәп табынға бирәбеҙ.

Был турамаға редис ҡушһаң да бик килешә.

## Тиҙ әҙерләнгән урама

*Ләүәш, ҡыяр, йомортҡа, ҡыҙыл балыҡ, эремсекле сыр кәрәк.*

Ләүәшкә эремсекле сыр яғабыҙ. Шунан нәҙек кенә итеп һаламлап туралған ҡыяр, ҡырғыстан үткәрелгән йомортҡа, ҡыҙыл балыҡ киҫәктәре һалабыҙ. Иплән кенә тығыҙ итеп урайбыҙ. Киҫәктәргә ҡырҡабыҙ.



podpiska-pochta.ru

БАШҠОРТ ӨЙӨ



# Ни сәсһәң, шуны урырһың

Әнисә Хажиева Учалы ҡалаһының Салауат Низаметдинов исемендәге сәнғәт һәм мәҙәниәт колледжында уҡыта. Халыҡ ижадын тәрән өйрәнеп, ул заманса интерьерға, модаға ярашлы итеп үҙенә генә хас автор әйберҙәрен эшләй. «Башҡорт биҙәү-ҡулланма сәнғәте – халҡыбыҙҙың байлығы, ҡаҙанышы. Ул йәшәһен өсөн, тирә-яҡ донъя менән бергә үҫешергә, йәмғиәттең ихтыяждарына ла яуап бирергә тейеш. Рәссам, уҡытыусы буларaҡ, башҡорт халыҡ сәнғәтен өйрәнеүҙе, уны таратыуҙы, традицион формаларҙы үҫтереүҙе үҙемдең бурысым һанайым. Бының өсөн музей экспонаттарын, әҙәбиәтте өйрәнәм, семинарҙарҙа, оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнашам. Һәр яңы алымды үҙләштергәндән һуң ижади эшкә тотонам, башҡарған әйберҙәрем методик ҡулланма ла булып хеҙмәт итһен, тип тырышам», – ти Әнисә Әнүәр ҡыҙы.

Оҫтабикә күргәҙмәләрҙә, һөнәри бәйгеләрҙә ҡатнашырға ярата. Нәфис телде тапҡанһыңмы, башҡарған ғәмәлең кешеләр йөрәгенә юл асҡанмы икәнен тап шул мәлдәрҙә аңлайһың, тигән фекерҙә ул. Кемдер уның эшенә һоҡланып, үҙе лә өйрәнергә теләй икән, камиллыҡ һабаҡтары менән бүлешергә әҙер. Музейҙарҙа, китапханаларҙа, балалар баҡсаларында оҫталыҡ дәрестәре үткәреүҙе емеш баҡсаһы ултыртыуға тиңләй уңған ханым – бөгөн ултыртҡан баҡса үҫентеләре әлегә күренмәһә лә, бер саҡ бөрөләнер, гөрләтеп емеш бирер, халыҡ ижады өлгөләре киләсәк быуындарҙың да рухи хазинаһы булып торор.



Индекстары – 50606, П2719. Хаҡы ирекле.

4 665299 181456 23003

pochta.ru